*Әгәр ҙә кешеләр ғашиҡ булыу арҡаһында ғына ғаилә ҡорһа, күбеһе ғүмер буйы тормош иптәшһеҙ йәшәп донъя ҡуйыр ине.*

*(Роберт Стивенсон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 ОКТЯБРЬ - 5 НОЯБРЬ (ҠАРАСАЙ-ҠЫРПАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru — 2002 йылдан башлап сыға — Һатыуҙа хаҡы ирекле — №44 (410)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Башҡорт телен...** өйрәнергә һәм ярларға кәрәк! — 2,5



**Ҡолғана хазинаһы** — 6



**Комсомолдан алда тыуҙы...** — 7




**Сит илде маҡта ла...** тыуған илендә йәшә — 8-9



14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Депутат этикаһы буйынса комиссия бар, вазифалы кешеләр этикаһы буйынса ла комиссия булдырылһа, һеҙ унда нимә тураһында хәбәр итер инегеҙ?

***Рафаэль ЗИННУРОВ, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары:*** Депутат этикаһы буйынса комиссия эшен мин етәкләйем. Дәүләт Йыйылышының 31-се ултырышында беҙ бер нисә коллегабыҙҙы депутат этикаһын боҙғаны өсөн тикшерҙек. Улар киләсәктә Башҡортостан Республикаһының "БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты статусы тураһында"ғы Законында ҡаралғанса, үҙ мөмкинлектәрен файҙаланғанда сиктән сыҡмаясаҡтары хаҡында белдерҙе.

Һорауҙың икенсе өлөшөнә килгәндә, әгәр ҙә вазифалы кешеләр этикаһы буйынса ла комиссия булдырылһа, мин вазифалы кешеләрҙең иң беренсе нәүбәттә кешелеклелек принциптарын беренсе урынға сығарыуҙарын, бюрократлыҡтан, формализмдан азат булыуҙарын онотмауҙарын тәҡдим итер инем.

***Вәли ИҘРИСОВ, хеҙмәткәр:*** Вазифалы кеше, йәғни чиновник әхлаҡһыҙлығы граждандарҙы ришүәт бирергә өйрәтә, шуға күрә былай комиссияны булдырыуҙы ришүәтселеккә ҡаршы көрәш тип тә атарға мөмкин булыр ине. Әхлаҡһыҙ чиновник төҙөгән яһалма кәртәләрҙе үтер өсөн дә граждандар ришүәт бирергә мәжбүр. Шуға күрә вазифалы кеше этикаһының төп принцибы: граждандар чиновникҡа түгел, ә чиновник граждандарға хеҙмәт итергә һәм ярарға тырышырға бурыслы. Беҙҙең илдә вазифалы кеше этикаһы буйынса комиссия булһа, чиновниктың ниндәйҙер ҡарары менән риза булмаған граждан ризаһыҙлығын комиссияға килеп белдерә алыр ине. Әлегә граждандың вазифалы кешегә дәғүә белдерер бер генә урыны - суд бар. Ә беҙҙең ил граждандары судтарҙан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша һәм шул арҡала чиновник әхлаҡһыҙлығы "язаһыҙ" ҡала килә.

***Рита ФӘТКУЛЛИНА, шағирә, филология фәндәре кандидаты:*** Намыҫ кешелек рухына тоғролоҡ менән үлсәнә. Тап ошо сифатҡа эйә етәксе юғары маҡсаттарға, кешелек принциптарына тоғро ҡалырға, халыҡҡа намыҫлы хеҙмәт итергә тейештер. Намыҫлы етәксе, фиҙаҡәр чиновник ҡына власты үҙ маҡсатында түгел, ә халыҡ мәнфәғәтендә файҙалана. Вазифалы кешеләрҙең этика нормаларын мин тап ошо рәүешле итеп күҙ алдына баҫтырам. Әгәр ҙә юғарыла әйтелгән комиссия төҙөлә ҡалһа, ул үҙ эшмәкәрлегендә вазифалы кешенең намыҫ принцибына тура килеү-килмәүен ҡарарға тейештер.

***Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ, шағир:*** Былай комиссия ойошторолған хәлдә лә, илебеҙҙә граждандлыҡ йәмғиәте булмайынса, киң билдәлелек урынлашмайынса тороп, мин уның уңышлы эшләренә ышанмайым. Ни өсөн тигәндә, вазифалы кешеләр үҙҙәре үк был комиссияның эшен баштүбән әйләндерәсәк. Беҙҙә әле "Телефон хоҡуғы", йәғни авторитарлыҡ тулы көсөндә эшләй һәм ҡайҙалыр йыйылып, ниндәйҙер чиновникты әхлаҡһыҙлыҡта тәнҡитләп ҡара. Әлбиттә, комиссия эшләй, теге йәки был чиновникты "ҡыҙған табаға" баҫтырҙылар, тип яҙасаҡтар, демократик принциптар хаҡында һөйләйәсәктәр, әммә, ысынында, ошо комиссияла тороусылар аҫтыртын эш итеп, үҙҙәренә ҡулай булмағандарҙан үс алыу менән шөғөлләнәсәктәр. Юҡҡа ғына һуңғы ваҡытта күптәр эшҡыуарлыҡ өлкәһенә түгел, күберәк дәүләт структураларына ынтылмай.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

### ИҢ КӘРӘКЛЕ ҺҮҘ ӘЙТЕЛӘ БЫНДА




"Киске Өфө" башҡорт донъяһында иң кәрәкле һүҙҙе беренсе булып әйтә алыуы менән ҡәҙерле беҙгә. Ҡиммәтле тарихи материалдар, йыш ҡына әле бер ҡайҙа ла баҫылмаған мәғлүмәттәр һәм мәҡәләләр биреүе менән һоҡландыра гәзит. Бөгөнгө ҡатмарлы заманда нисек итеп юғалып ҡалмаҫҡа, төрлө шарттарҙа үҙеңде нисек тоторға, эске торошонд дөрөҫ көйләргә өйрәтеүсе кәңәштәр хуплауға лайыҡ. Әхмәр Үтәбайҙың төплө фекерле мәҡәләләрен, ул ойошторған "Диалог", "Монолог"тарҙы бик яратып уҡыйым. Унда һәр ваҡыт ниндәй ҙә булһа фәһем, ғибрәт алырлыҡ хәл-әхүәлдәр, халҡыбыҙ аҡылы, тормоштоң фәлсәфәүи асылы бәйән ителә.

Унан һәр бер мәҡәлә, сығыштарҙан һуң тәрбиәүи, уйландырырлыҡ һығымта яһалып ҡуйылыуы бик фәһемле. Һәр биттә текстарҙың иң тос фекерҙәрен айырып алып, өҫкә сығарып ҡуйыу шулай уҡ бик отошло алым. Былай биҙәлеш һәм алымды башҡа гәзиттәрҙә күргәнем юҡ.

"Киске Өфө"нөң башҡа баҫмаларҙан айырмалы тағы бер мөһим үҙенсәлеге бар: уны күҙ йүгертеп кенә ҡарап сығыу мөмкин түгел. Ул оҙаҡ итеп, бөтә иғтибарыңды туплап, диҡҡәт итеп уҡый торған баҫма. Бөтә эштәремде тамамлап, матур итеп ултырып, яйлап, тәмләп уҡыйым мин был гәзитте.

"Киске Өфө" гәзитенең үҙ йүнәлешенә тоғро ҡалыуын, яңынан-яңы уҡыусылар өҫтәлеүен теләйем. Әйткәндәй, уны алдырып уҡымаған кеше бик күп нәмәнән, тотош бер донъянан үҙен мәхрүм итәлер, тип уйлайым.

**Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА,**
**педагогия фәндәре кандидаты.**

ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!

**Ишеткәнһегеҙҙер, телевизорҙан ҡарағанһығыҙҙыр: Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов был вазифала эш башлауына 100 көн тулыу уңайынан Конгресс-холда республика һәм федераль киң мәғлүмәт саралары журналистары ҡатнашлығында матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Бик күп мәсьәләләр күтәрелде унда. Рөстәм Зәки улы тәүҙә ошо осорға һығымталары менән уртаҡлашты, үҙ эшмәкәрлегендә билдәләгән өс өҫтөнлөклө йүнәлеш - халыҡты эш урындары менән тәьмин итеү, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы һәм арзан торлаҡ менән тәьмин итеү тураһындағы фекерҙәрен еткерҙе. Ике сәғәткә яҡын барған осрашыуҙа журналистар Президентҡа йәшәйешебеҙҙең төрлө өлкәләренән - иҡтисади үҫеш, сәйәси ҡоролош, ауыл хужалығы, милләт-ара мөнәсәбәттәр тураһында һорауҙарын еткерҙе, аныҡ яуаптар алды. Ә шулай ҙа беҙҙең уҡыусыларыбыҙҙы бигерәк тә бер мәсьәлә - туған телебеҙҙең артабанғы йәшәйеше, үҫеше, уның мәктәптәрҙә уҡытылыуы ҡыҙыҡһындыра икәнен иҫәпкә алып, Президентыбыҙҙың тап ошо тәңгәлдә әйткән фекерҙәрен еткерәбеҙ.**



# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк!

- Бөгөн донъяла ике миллионға яҡын башҡорт йәшәй, - тине Президент был осрашыуҙа. - Шуның өсөн башҡорт телен өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк. Йәмғиәттә барған глобалләшеү шарттарында ул үҙенән күп тапҡырҙар кинерәк таралған рус, инглиз, татар телдәре яғынан көслө ҡыҫым аҫтында ҡалып килә. Ләкин һәр бер тел, шул иҫәптән башҡорт теле лә, уникаль. Был донъя мәҙәниәте күренеше, һәм ул яҡлаулы булырға тейеш. Башҡорт телен тергеҙеүгә булышлыҡ итергә, уға ярҙамлашырға кәрәк...

Ошондай хәлдә, Рөстәм Хәмитов фекеренсә, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыуҙы бөтөрөү бөтөнләйгә урынһыҙ.

- Минән ундай ҡарар көтөргә кәрәкмәй, - тине Президент. - Ҡултамға менән генә телдең йәшәү һәләтлеген шик аҫтына ҡуя алмайым. Мине быға этәрергә кәрәкмәй. Ә инде аңлыһы, аңһыҙ рәүештәме, шуны эшләргә маташҡан ҡайһы берәүҙәр милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе киҫкенләштереүгә алып бара. Ә былай эшләргә ярамай. Республикабыҙҙағы халыҡтар ошоға тиклем дә, бынан һуң да тыныслыҡта һәм килешеүҙә йәшәргә тейеш. Ә кем милләт-ара талашҡа этәрә - ул енәйәтсе.

* * *

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов ошо осрашыуҙан алда "Газета.Ru" хәбәрселәренең һорауҙарына яуап биргәйне. Унда ла ҡуҙғатылды башҡорт теленә ҡағылышлы мәсьәлә (ғәжәп, ниңәлер федераль кимәлдәге журналистарҙы был һорау барынан да нығыраҡ борсой). Был әңгәмәнән дә өҙөктәр һәм Президент блогына яҙылған ҡайһы бер хаттарҙы тәҡдим итәбеҙ.**

**Журналист һорауы: Башҡорт булмағандар өсөн мәктәптә мотлаҡ башҡорт телен өйрәнеү ҡасан бөтөрөлөр? Был бит уҡыусыларҙа кире тойғо ғына уята һәм көтөлмәгән һөҙөмтәләргә килтереүе ихтимал.**

**Президент яуабы:** Башҡортостан - күп милләтле республика: унда рустар - 36, башҡорттар - 30, татарҙар 25 процент тирәһе йәшәй. Башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле иҫәпләнә. Дәүләт телдәре тураһындағы закон 2005-2006 йылдарҙа ҡабул ителгән. Шуға ярашлы, республика мәктәптәрендә башҡорт һәм рус телдәре дәүләт теле булараҡ та өйрәнелә. Башҡа - татар, сыуаш, мари һәм шундай телдәр өйрәнелгән кеүек. Республика мәктәптәрендә бөгөн 6 телдә уҡытыла. Дәүләт телдәрен өйрәнеү бөгөнгө көн мотлаҡ иҫәпләнә. Ул ҡасан бөтөрөләр, тигән һорауға яуап бирерҙән алда мин был һорауҙың ҡуйылышы менән ризалаша алмайым. Эш шунда: Башҡортостан Республикаһы территорияһында башҡорт теле һәр ваҡыт өйрәнеләсәк. Иң тәүҙә башҡорттар һәм ошо телдә өйрәнергә теләүселәр тарафынан. Шул уҡ ваҡытта мин аңлайым: башҡорт телен мәжбүри уҡытыу булырға тейеш түгел. Көсләп аҫҡан күҙҙең яҡтыһы юҡ, тиҙәр. Һәм ошоға бәйле шуны әйткем килә: телдәрҙе өйрәнеү йәки, киреһенсә, уны өйрәнеүҙе туҡтатыу хоҡуғы шулай ҙа закон сығарыусыларҙың вәкәләтлегендә. Бөгөнгө хәл республиканың закондары менән көйләнгән. Шуға күрә иң тәүҙә Президенттан нимәнелер кисектергеһеҙ талап итерҙән алда республика закондарын өйрәнергә кәрәк. Ә бөгөн ул шундай тәртиптә: эйе, республика мәктәптәрендә теге йәки был күләмдә башҡорт теле мотлаҡ өйрәнеләсәк. 100 көн эшләү осоронда мин БР Дәүләт Йыйылышы яуаплылығындағы закон нигеҙҙәре тарафынан билдәләнгән был ҡатмарлы мәсьәләне төпсөрләп өйрәнеүҙе мөмкин түгел, тип иҫәпләйем. Шуға күрә минән мөмкин булмағанды талап итеүҙең бөгөнгө көндә мәғәнәһе юҡ. Дискуссия булыр, белгестәр һәм депутаттар баһаламаһы, тип әйтәйекме - булыр. Ошо фекер алышыуҙар нигеҙендә Дәүләт Йыйылышы тарафынан, ихтимал, ниндәйҙер ҡарар ҡабул ителер. Минең шәхси фекерҙе килтерәм, шул: республикала башҡорт телен өйрәнеү кәрәк. Ләкин мин уны мәжбүри талап итеүгә ҡаршымын.

**Журналист һорауы: Йәғни һеҙ, "башҡорт теле" тигән мотлаҡ фән булырға тейеш түгел, тип иҫәпләйһегеҙ?**

**Президент яуабы:** Юҡ, Башҡортостан Республикаһында мин телде өйрәнеү мотлаҡ булырға тейеш, ләкин кем уны теге йәки был сәбәптәр менән өйрәнергә теләмәй, уны беҙ мәжбүр итмәйәсәкбеҙ, тип иҫәпләйем. Был осраҡта мин телде өйрәнеү йәки уҡыу процесына ҡағылышлы мөнәсәбәт булдырыу буйынса белгес кеүек сығыш яһай алмайым. Минең мөнәсәбәтем шундай: Башҡортостанда ла булмағас, тағы ҡайҙа башҡорт телен өйрәнергә һуң? Планетала башҡорттар йәшәгән, Башҡортостан Республикаһы булған ер башҡаса юҡ. Әлбиттә, Өфөлә һәм Башҡортостан Республикаһында телде һәр ваҡыт өйрәнәсәктәр. Өлгөргәнлек аттестаты, уҡыу процесын ойоштороу тураһында яуап бирергә мин әле әҙер түгел. Үҙ фекеремде белдереп, мин уҡытыусыларҙы уҡытыу сифатын күтәрергә, дәрестәрҙе ҡыҙыҡлыраҡ итергә саҡырам, грамматика, синтаксис, морфология ҡатмарлыҡтарынан уҡытыуҙың йәнле һөйләү теле вариантына күсергә тәҡдим итәм. Мәктәпте тамамлауға, уҡыусы, исмаһам, башҡортса аралашыуҙа бер аҙ булһа ла ҡатнашлыҡ итә алһын. Ләкин әгәр ҙә кеше, ғөмүмән, был фәнде уҡырға теләмәй икән, уны уҡыуға мәжбүр итмәү сараһын табырға кәрәк: уны ҡолағын бороп был дәрескә алып килеү, моғайын, дөрөҫ булмаҫ ине.

**(Дауамы 5-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# ХӨРМӘТЛЕ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу барыуы тураһында тағы ла бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.**

➔ Әлбиттә, гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәр бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Уларға микротулҡынлы мейес, кеҫә телефоны, сепаратор, электр сәйнүге, үтек һәм башҡа төрлө матур бүләктәр отторасаҡбыҙ. Квитанцияларын тәүгеләрҙән булып ебәргән 300 кеше "Дини календарь" алып ҡыуанасаҡ.

➔ Әйткәндәй, кемде бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

➔ "Киске Өфө" бүләгем" акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.



**50665** индекслы **"Киске Өфө"** алты айға **330 һум 24 тин, 50673** индекслыһы (предприятие һәм ойошмалар өсөн) - **360 һум 24 тин** тора.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✓БР Хөкүмәтендә Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендә коррупцияға ҡаршы комиссия ултырышы булып үтте."Коррупция - хәҙерге замандың иң ҡырҡыу проблемаларының береһе, - тине Президент. - Беҙҙә уның шауҡымына бирелмәгән бер тармаҡ та, бер биләмә лә юҡ, ул системалы күренешкә, дәүләт механизмының бер өлөшөнә әүерелгән". Рөстәм Зәки улы тәнҡитте һуңғы йылдарҙа Хөкүмәттән фатирҙарҙы бер ниндәй сиратһыҙ мохтаж булмағандарға таратыуы миҫалынан башланы. Ҙур сығымдар талап иткән юл төҙөлөшөнөң ҡайһы саҡ һис уйламай планлаштырылыуы менән дә ҡәнәғәт булмауын белдерҙе ул. Коррупцияның хатта социаль тармаҡҡа - мәғарифҡа, һаулыҡ һаҡлауға ла үтеп инеүе билдәләнде.

✓Башҡортостанда кадрҙарҙы профессиональ сифаттарына ҡарап түгел, ә танышлыҡ, туғанлыҡ йәки шәхси мөнәсәбәттәр буйынса һайлау практикаһы ныҡ тамыр йәйгән. Иң тәүҙә был дәүләт хеҙмәткәрҙәренә һәм республика учреждениеларында эшләүселәргә ҡағыла. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй сәйәсәте мәктәбен тамамлаусылар менән осрашыуында ошо хаҡта белдерҙе.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Өфө ҡала хакимиәтендә Өфөнө үҫтереү генераль планын тикшереүгә арналған ултырышта ҡатнашты. Өфө 1803 йылдан алып генераль план буйынса үҫтерелә. Һуңғы генераль план 1996 йылда ҡабул ителгән. 2006 йылдан сираттағы генпланға төҙәтеүҙәр индерелә башлаған. Ул ике этапта - 2015 һәм 2025 йылға тиклем тормошҡа ашырыласаҡ. "Әлбиттә, был проекттарҙы тормошҡа ашырыу күп аҡса талап итә, - тине Президент.- Әммә программа тормошҡа ашырылыҡ. Республиканың баш ҡалаһы Рәсәйҙең иң үҫешкән һәм иң матур ҡалаларының береһе булырға тейеш".

✓"2025 йылға Өфөлә 13 млн кв метр торлаҡ төҙөү планлаштырыла, - тине был осрашыуҙа баш ҡала хакимиәте башлығы Павел Качкаев. - Был ҡалала торлаҡ менән тәьминителеште бер кешегә 25,9 кв м-ғаса еткерергә мөмкинлек бирәсәк. Бөгөн был күрһәткес бер кешегә 22,1 кв м тәшкил итә. Планлаштырылған күрһәткескә өлгәшеү өсөн торлаҡ төҙөү темпын яҡынса 10 процентҡа арттырырға кәрәк буласаҡ".

✓ *Светофорҙы юҡҡа сығарыу - башҡа һыймаған эш кеүек тойола. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай. Бөгөн теләһә кем, ныҡлабыраҡ тотонһа, бер ҡасан да емерелмәҫ кеүек тойолған ҡанундарҙы юҡҡа сығарыуы ихтимал.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# СВЕТОФОРҘЫ ҺАҠЛАЙЫҠ,

## йәки Күпселек - көсмө, көсһеҙлекмө?

**Йәмғәт, һеҙ көнөнә нисә тапҡыр юл аша сығаһығыҙ? Уны кем һанаған инде, тиерһегеҙ. Улай булғас, икенсе һорау - светофорға иғтибар итәһегеҙме? Һис шикһеҙ, тип яуапларһығыҙ, моғайын. Башҡаса мөмкин түгел. Бары тик "йәшел"гә генә. Юғиһә... Хәйер, үҙегеҙ белеп тораһығыҙ. Светофор уттарының мәғәнәһен бала саҡтан уҡ ятлап алғанбыҙ. Шулай бит? Ҡыҙыл, тимәк, тукта. Һары - әҙерлән, иғтибарыңды тупла. Ә йәшел янһа - алға атла. Әммә, уңлы-һуллы ҡарап алырға онотма. Һеҙгә был хаҡта туҡтауһыҙ тылҡығандарҙыр. Өйҙә - ата-әсәйегеҙ, балалар баҡсаһында - тәрбиәселәр, мәктәптә - уҡытыусылар.**

Светофорҙың уттары хаҡында хатта шиғырҙар ижад ителгән (тик береһен дә иҫкә төшөрә алмайым), әкиәттәр яҙылған. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ әле - өс кенә ут - ҡыҙыл, һары, йәшел, ә ҡала халҡы үҙ тормошон светофорһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмай. Ҡалала бер генә урам сатында ҡапыл ғына светофор һүнһә, шунда уҡ оло ғауға, шау-шыу, тауыш ҡуба. Йәйәүлеләр урам аша үтә алмай аптырана, юл киҫелешендә осрашҡан автомобилдәр бер-береһенән нисегерәк урап үтергә, үткәреп ебәрергә белмәй. Уңға ла, һулға ла боролоу мөмкин түгел. Тура барырға ла юл бирмәйҙәр. Хаос! Шул арала йылғырыраҡтар, һөмһөҙҙәр алға ынтыла, кемделер урап үтергә, юлын ҡыйырға маташа, алданыраҡ, сиратһыҙ ҡуҙғалырға самалай. Тәртипкә өйрәнгәндәр иһә баҙабыраҡ ҡала. Ни эшләргә белмәй. Светофор менән юлдағы халыҡ - йәйәүлеләр ҙә, рулдәгеләр ҙә - үҙҙәрен, нисектер, тынысыраҡ тоя. Ҡала урамдарының бер тотҡаһы ул тәртип һәм хоҡуҡ символы - светофор.

Әммә ҡапыл ғына кемдер берәү светофорҙың эшенә шик белдерә. Берәү генә ул. Әлегә берәү. Әммә үҙ һүҙле һәм ҡара тырыш. Үҙенең хаҡлы икәнлегенә ышаныпмы ышана. Ни өсөн, тип ҡысҡыра был бәндә, беҙ һарыҡ кеүекбеҙ. Ни өсөн беҙҙе кемдер светофорға, уйлап ҡараһаң, йәнһеҙ бер механизмға, буйһоноп йәшәргә мәжбүр итә. Ни өсөн беҙ ҡыҙыл утҡа туҡтарға тейешбеҙ, ә йәшелгә - атларға? Кем быны уйлап сығарған? Ҡасан? Кем тарафынан һәм ниндәй документта был ҡағиҙә нығытылған? Ни эшләп беҙ ҡыҙыл утҡа атлап, йәшел утҡа туктай алмайбыҙ? Ә һары тәҫ нимәгә кәрәк? Уйлап ҡарағыҙ әле, ти ул, светофорға ҡарап тороп, күпме ваҡытыбыҙҙы әрәм итәбеҙ. Ул өс "күҙ"ҙе Аллаһ урынына күрәбеҙ. Хатта унһыҙ йәшәй алмайбыҙ кеүек. Ялған. Светофорһыҙ ҙа ғүмер итеп була, тип һөрәнләй ул.

Күпселек был бәндәне ишетмәй. Үҙ тормошо менән йәшәүен дауам итә. Йәшел утҡа атлай. Ҡыҙылға туктай.

Әммә теге әҙәм тынысланмай. Ул, әлбиттә, башҡалар кеүек үк урам аша светофорҙың йәшел утына ғына сыға. Үҙе лә шулайта, балаларын да өйрәтә. Әммә үҙе һаман йәшел утҡа ҡаршы. Баш күтәреү, яуға сығыу - уның исулы түгел. Ул һүҙ көсө менән еңеп сыҡмаҡсы. Дөрөҫөрәге, ҡағыҙ көсө менән. Ҡағыҙ бит күтәрелгән ҡылыстарҙы ҡынға һалырға мәжбүр иткән, йөҙйәшәр имән кеүек тамырҙарын тәрәнгә ебәргән түрәләрҙе урындарынан осорған, доньяларҙы аҫтын-өҫкә килтергән ауыһыҙ көс.

Светофорға ҡаршы сығыусы эште төрлө инстанцияларға хаттар яҙыуҙан башлай. Уның мөрәжәғәттәрен уҡыйҙар, тикшерәләр, яуап бирәләр. Яуап бирмәй ярамай. Ул бит аноним түгел, исем-шәрифтәрен йәшермәй. Ул - ошо дәүләттең гражданы. Светофорҙың эше юл йөрөү ҡағиҙәләре менән көйләнә, тигән яуап алғас та был бәндә тынысланмай. Ул ҡағиҙәләрҙе яҡшы белә. Уға бола, ҡаңғырыҡ, шау-шыу кәрәк. Был ҡағиҙәләрҙе кем әҙерләгән, кем ҡабул иткән, кем раҫлаған, тип ҡалҡып сыға ул. Ҡабаттан хаттар яҙа башлай. Әлекке яҙмаларын да ҡушып ебәрә. Уның тирәләй төрлө кеше туплана башлай. Береһе светофорҙың йәшел утына сығып барғанда абынып киткәнме шунда, икенсеһе дальтоник икән, йәғни, йәшел һәм ҡыҙыл төҫтө бутай. Өсөнсөһө, ғөмүмән, был донъяла бөтә нәмәгә ҡаршы. Кемдер уларға интернетта махсус сайт эшләп бирә. Кемдер устав яҙа. Икенсе берәүҙәр уны юстиция министрлығында теркәй. Шулай итеп, светофорға ҡаршы булыусыларҙың берләшмәһе хасил була. Йәғни, оппозиция (латинсанан - күпселектең фекеренә ҡаршы сығыусылар).

Күпселек иһә уларҙы күрмәй ҙә тиерлек.

Берләшмә - ул көс. Уның исеменән митингылар, пикеттар ойошторорға, коллектив хаттар яҙырға, ваҡытлы матбуғат сараһы булдырырға мөмкин. Берләшмәнең банкыларҙа үҙ иҫәбен асырға һәм унда аҡса тупларға була.

Шулай итеп бер мәл, светофор менән көрәш яңы кимәлгә күтәрелә. Баҡтиһәң, светофор менән көрәшеүселәр башҡа ҡалаларҙа, хатта бүтән төбәктәрҙә лә бар икән. Улар тупланышып светофорҙың эшен көйләгән ҡағиҙәләрҙе ҡабул иткән органдарҙы - әйтәйек, закондар сығарыу йыйылышын йәки хөкүмәтте отставкаға ебәреүҙе талап итерлек кимәлгә барып етә. Улар төрлө кимәлдәге дәүләт органдарына үҙ вәкилдәрен, депутаттарын үткәреүгә ирешә. Тегеләре иһә мандаттары менән файҙаланып, светофорға ҡаршы сығыш яһай, йәмғәтселек фекерен үҙгәртергә маташа.

Күпселек иһә һаман үҙ эше менән мәшғүл.

Шул арала светофорға ҡаршы яу аҫҡан оппозиция менән сит илдәрҙә ҡыҙыҡһына башлайҙар. Тиҙ арала махсус рәүештә светофор менән көрәшеүселәргә ярҙам итеү фонды булдырыла. Уны "Демократия өсөн - светофорға ҡаршы" тип атайҙар. Фондта тупланған аҡсаны махсус гранттарға бүлеп, светофор менән көрәшеүселәргә тараталар, "Светофор менән көрәшеү ликбезы" тип аталған бюллетень сығара башлайҙар. Шулай итеп, был көрәш халыҡ-ара төҫ ала. Уның хаҡында Евросоюз дәүләттәре, Америка Ҡушма Штаттары Президенты һәм Конгресы, Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы хәбәрҙар була. Әлбиттә, улар үҙ илдәрендә светофорҙан баш тартырға ашыҡмай. Әммә башҡаларға быны ихласлап тәҡдим итә. "Светофорһыҙ тормош - азат тормош", "Киләсәк быуын урамды йәшел утҡа сыҡмаясаҡ" тигән лозунгылар аҫтында балаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың, пенсионерҙарҙың ойошмалары барлыҡҡа килә. Бына бер ваҡыт...

Тукта, тигән тауыштарҙы ишетәм. Фантазияһы бай кеше икәнлегең күренеп тора, булмағанды яҙаһың, әкиәт һөйләйһең, тигән кеүек минә гәзит уҡыусылар. Бер ҡасан да берәү ҙә светофорға ҡаршы сыҡмаясаҡ. Ул бит юлдарҙа хәүефһеҙлек булһын өсөн булдырылған. Кем баҙнат итеп үҙен, яҡындарын, балаларын, ғөмүмән, күпселек халыҡты ҡурҡыныс аҫтына ҡуйһын инде? Был бит бөтә кеше күнегеп бөткән, йөҙ йылға яҡын эшләп килгән системаны юҡҡа сығарыу, тигән һүҙ. Был эш ғәйәт ҙур сығымдар талап итәсәк, әллә күпме кеше эшһеҙ тороп ҡаласаҡ. Светофор урынына ниндәйҙер яңы прибор уйлап сығарырға, кешеләрҙе уның сигналдарын аңларға өйрәтергә, ғөмүмән, бөтә нәмәне аҫтын-өҫкә әйләндерергә кәрәк буласаҡ. Был бит хоҡуҡи нигилизм, йәғни, Законды, хоҡуҡи ҡиммәттәрҙе инҡар итеү тигәнде аңлата ла баһа!

Борсолоуығыҙ урынлы, йәмғәт. Ысынлап та, светофорҙы юҡҡа сығарыу - башҡа һыймаған эш кеүек тойола. Ләкин был тәү ҡарашҡа ғына шулай. Бөгөн теләһә кем, ныҡлабыраҡ тотонһа, бер ҡасан да ҡаҡшамаҫ, емерелмәҫ кеүек тойолған ҡанундарҙы юҡҡа сығарыуы ихтимал.

Айырыуса, күпселек күрмәһә, ишетмәмешкә һалышһа, үҙ эштәре менән мәшғүл булып, белмәҫкә маташһа. Тирә-яҡта барған процестарға битараф ҡалһа.

**Таһир ИШКИНИН.**

*СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ*

# КҮКТӘГЕҺЕНӘН ҠАСЫП БУЛМАЙ...

**Беҙ йыш ҡына Ерҙә генә ҡанундар бар тип инанып, Аллаһ язаһы хаҡында онотабыҙ. Һинең өсөн ниндәй ҡанун - ерҙәгеһеме, күктәгеһеме - мөһимерәк?**

**Урал ИШБУЛАТОВ, тәфтишсе, 34 йәш:** Хоҡуҡ һаҡлау структураларында тәүләп эш башлаған йылдарҙа закондарҙың берҙән-бер дөрөҫлөк, ғәҙеллек өлгөһө булыуына ышана инем. Беҙҙең бурыс - һәр законды һәр кем тарафынан үтәлеүен контролдә тотоу, ошо рамкаларға "һыймаған" кешеләрҙе хөкөмгә тарттырыу. Йылдар үткән һайын, беҙҙең структураларҙан тыш, "күктән кұҙәтеүсе"нең эшмәкәрлегенә лә шаһит була барам. Яуызлыҡ эшләгән әҙәм, беҙҙән ҡотолһа ла, Аллаһы Тәғәлә ҡәһәренән, язаһынан улай енел генә ҡотола алмай. Яуаптан ҡасҡан кешеләр менән төрлө хәлдәр булғылай. Бер иҫерек ирҙе ике йәш егет төндә тәмәке таптырып туҡмап китә. Иртәгеһе көн уның үле кәүҙәһе табылды. Экспертизанан һуң уның туҡмалыуҙан түгел, ә туныуҙан үлеүе мәғлүм булды. Теге ике егеттең береһе ярты йылға колонияға ебәрелде, икенсеһе иһә, штраф түләү менән генә ҡотолдо. Тәүге егет, холоҡ төҙәтеү колонияһында ултырып сыҡҡас, ҡыш көнө кис район үҙәгенән ауылына тип юлға сыға. Әммә уны бер водитель дә ултыртырға теләмәй. Сатлама һыуыҡ булыуға ҡарамаҫтан, йәйәүләп ҡайтып китә. Ауылына етеп барған ерҙә, зыярат тапҡырында, һыуыҡтан ҡыҙышып, бар кейемен сисеп ташлап, йән бирә егет. Был хәлдән һуң шундай һығымтаға киләһең: бер кем дә яуаплылыҡтан ҡасып ҡотола алмай.

**Рәфил ҒӘЛИӘХМӘТОВ, хеҙмәткәр, 23 йәш:** Минең күңелдә күктәге ҡанундарҙың, йәғни дини ҡанундарҙың да, граждан булараҡ, ерҙәге закондарҙың да урын алыуы мине икеләтә көслө итә. Халҡыбыҙ элек-электән дини ҡанундарға, быуындан-быуынға күскән аҡһаҡалдар һүҙенә - мәҡәл-әйтемдәргә ҡолаҡ һалған.Шулай ҙа, минең өсөн яҙылған ҡанундарға ҡарағанда яҙылмаған ҡанундар мөһимерәк. Уларҙа меңәр йыллыҡ аҡыл ята бит.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, Өфөлә автомобилдәр һаны арта бара, әле ул 1 мең кешегә 320 тура килә. Был күрһәткес дөйөм Рәсәй күрһәткесен күпкә артта ҡалдыра: ул 1 мең кешегә 240 автомобиль тәшкил итә. Ә Мәскәүҙә 1 мең кешегә 400 автомобиль тура килә. Шуға ла Өфө урамдарында тығындар ҙа арта бара. Бының сәбәбе - гараждар һәм махсус йыһазландырылған парковкалау урындары етешмәүе.

✓Оҙаҡламай Өфөлә велосипед юлдары барлыҡҡа киләсәк. Был хаҡта Президент үткәргән кәңәшмәлә баш ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Ирек Ялалов хәбәр итте. Бындай юл "Кашҡаҙан" паркында бар. Әле Якутов исемендәге һәм М. Ғафури исемендәге парктарҙа ла шундай юлдар төҙөү планлаштырыла. Ә киләһе йылдан ҡала магистралдәрен үҙгәртеп ҡорғанда улар эргәһендә лә велосипед юлдары төҙөләсәк.

✓Шулай уҡ Ирек Ялалов хәбәр итеүенсә, Сипайлово биҫтәһенә инеү юлындағы тығындар проблемаһы ла яҡын арала хәл ителәсәк. Биҫтәгә инеү юлындағы Жуков урамында юл дүрт һыҙатҡа тиклем киңәйтеләсәк. Сипайловский урамы ла киңәйтеләсәк. Яҡын киләсәктә Салауат Юлаев проспектының һәм Б. Бикбай урамындағы транспорт юлының икенсе сиратын төҙөү ҡарала. Был тормошҡа ашырылғас, Жуков урамы бөтөнләй биҫтәнең эске ягында ҡаласаҡ.

✓Башҡортостан Президенты Өфө менән аэропортты бәйләүсе юл трассаһын сәнәғәт предприятиелары зонаһына әйләндереүҙе тәнҡитләне. "Бында торлаҡ кварталдары һәм уларға хеҙмәт күрһәтеүсе инфраструктура биналары урынлашырға тейеш ине, - тине Рөстәм Зәки улы. - Киләсәктә Өфөлә лә, Башҡортостанда ла бындай хаталарға юл ҡуйылырға тейеш түгел". Президент Өфө янындағы биләмәләрҙә аҙ ҡатлы йорттар төҙөлөшөн үҫтереү һәм уны берҙәм план буйынса тормошҡа ашырыу зарурлығы маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тип билдәләне. "Ярымутрауҙа урынлашҡан Өфөлә хәҙер яңы төҙөлөштәр алып барырлыҡ урындар ҙа ҡалмай, - тине Президент. - Шуға ла киләсәктә баш ҡаланы йылға аша сығарыу тураһында уйлашырға, ә бының өсөн яңы күперҙәр төҙөргә кәрәк".

✓Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың яҡынса мәғлүмәттәре буйынса Өфөлә 1 млн 30 мең кеше йәшәй. 2025 йылға баш ҡала халҡы 100 мең кешегә артырға мөмкин.

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

**Дим.** Хакимиәт инициативаһы менән райондың 132-се мәктәбендә ветерандарҙы компьютер серҙәренә өйрәтә башлаясаҡтар. Курстың оҙайлығы 25 сәғәт буласаҡ, ветерандар өсөн хаҡтар мөмкин тиклем кәметелеп, 400 һум торасаҡ. Әлегә 10 ветеран курстарға яҙылырға теләк белдергән. Уҡыу төркөм тупланыуға ҡарап башланасаҡ

**Совет.** 27 октябрҙә "СемьЯ" сауҙа-күңел асыу комплексы фойеһында ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау мәсьәләләре буйынса ҡала халҡына консультация биреү маҡсатынан күсмә ҡабул итеү уҙғарылды. Сара халыҡтың хоҡуҡи белемен үҫтереүгә йүнәлтелде.

**Калинин.** Район хакимиәте башлығы үткәргән оператив кәңәшмәлә алыҫ территорияларҙа рөхсәтһеҙ сүп-сар түгеү урындарын бөтөрөү, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын сығарыу мәсьәләләре ҡаралды. Августа Федоровка, Йылҡыбай, Базилевка ауылдарында "Ҡыҙғылт-һары пакет" тәжрибә проекты башланып, ул көнөнә 70-100 пакет йыйылыуын асыҡлаған. Хәҙер был проект Максимовка ауылында ла эшләй.

**Киров.** Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ветерандар араһында ҡала спорт фестивале үтте. Киров районы спортсылары менән бер рәттән, стартҡа башҡа райондарҙан да алты команда сыҡты. Улар 10 спорт төрө буйынса өс йәш категорияһында көс һынашты.

**Октябрь.** Райондың 127-се мәктәбендә "Спорт - наркотиктарға ҡаршы" акцияһы сиктәрендә "Аҡ ладья 2010" команда беренселеге уҙғарылды. Турнирҙа райондың 14 мәктәбе командалары ҡатнашты. Беренсе урынды 42-се мәктәп командаһы яулаһа, икенсе-өсөнсө урынға 38-се мәктәп шахматсылары лайыҡ булды.

**Орджоникидзе.** Сананды йәй әҙерлә, тигән халыҡ мәҡәле торлаҡ-коммуналь хужалығы өлкәһендә эшләүселәрҙең хеҙмәте тураһында әйтелгән тиерһең. Улар ҡышҡа әҙерлекте яҙҙан башлай. Башҡа эштәр менән бер рәттән, районда 672 кубометр ҡом әҙерләнгән, 34 техниканың икеһе ремонтта. 12 - 15 октябрҙә уҙғарылған ҡала авария-диспетчер хеҙмәттәре конкурс-смотрында район яҡшы һөҙөмтә күрһәтә.

**Ленин.** Ошо көндәрҙә БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәтих Иҡсанова мемориаль таҡтаташ асылды. Сарала ҡатнашыусы 91-се гимназия уҡыусылары был көндә республиканың билдәле кешеләренең - Башҡорт дәүләт филармонияһының элекке режиссеры, "Йәдкәр" фольклор төркөмөн ойоштороусыларҙың береһе тураһында күп нәмә белде.

## МӘСКӘҮ ХӘБӘРЕ

# ЙӨРӘКТӘРҘӘ ҺИН, БАШҠОРТОСТАН!



**Башҡортостандан йыраҡта, Мәскәүҙә йәшәһәк тә, милләттәштәребеҙ менән йыш ҡына төрлө сараларҙа осрашып торабыҙ. Яңыраҡ Милләттәр йортонда яҡташтарыбыҙ өсөн иң ҙур байрамдарҙың береһе - Республика көнө үтте.**

"Советтар Союзы тарҡалып, илебеҙҙә ауыр тарихи шарттар барлыҡҡа килгәндә лә республикабыҙ тарҡалманы, киреһенсә, берҙәм көс менән Дәүләт суверенитеты ҡабул ителде. Үтеп киткән ошо 20 йыл эсендә халҡыбыҙ төп маҡсаттарын нығытты, үҙаңыбыҙҙы, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы һаҡлап ҡалды. Улай ғына ла түгел, республикабыҙ йәшәү кимәле буйынса Рәсәйҙең ун алдынғы төбәктәре рәтендә килә, бигерәк тә ауыл хужалығын үҫтереү йәһәтенән республикабыҙ тырышлығы баһалап бөткөһөҙ", тигәйне ҡотлау һүҙендә Башҡортостандың РФ Президенты эргәһендәге тулы хоҡуҡлы вәкиле Салауат Ғүмәров. Советтар Союзы Геройы, Мәскәү ҡалаһындағы башҡорттарҙың төбәк ойошмаһы етәксеһе Тәлғәт Хурамшин үҙенең ҡотлау һүҙендә Башҡортостан киләсәгенең төп нигеҙе - махсус әҙерлекле милли кадрҙар ҡулында булыуы тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашты.

Йылдағыса, Республика көнө уңайынан Мәскәү ҡалаһы юғары уҡыу йорттарында тик "5" билдәләренә өлгәшкән студенттарға БР Президенты стипендияһы тапшырылды. Маргарита Аллабирҙина, Гүзәлиә Рыҫҡолова (ГИТИС), Рифат Усманов, Луиза Миназова (Бауман исемендәге МДТУ), Гөлназ Шаһивәлиева (Юғары иҡтисад мәктәбе дәүләт университеты), Артур Вәлиуллин (МДУ) Президент стипендиаты исемен йөрөтөү хоҡуғына эйә булды.

Республика көнөнә арналған саралар сиктәрендә Мәскәү башҡорттары "Минең йондоҙом" тип аталған башҡорт фильмын ҡарап, уның режиссеры Таңсулпан Бураҡаева һәм фильмды ҡуйыусы Руслан Мәғәлимов менән аралашты. Был осрашыуҙа "Киске Өфө"ләр ебәргән гәзиттәр ҙә тиҙ арала таралып бөттө, сөнки ситтә йәшәһәк тә, бында бер кем дә республика тормошона битараф түгел. "Правда" клубында Башҡортостан егеттәре һәм ҡыҙҙары өсөн дискотека үтте, унда йәштәр ҡымыҙ эсеп, сәк-сәк менән һыйланып, башҡортса көйҙәргә бейеп, күңел асты.

Йөрәгендә башҡорт рухы йөрөткән кеше бер ҡайҙа ла башҡортлоғон онотмай. Меңәрләгән саҡрым йыраҡлыҡта, төрлө милләттәр араһында йәшәһәк тә, уйҙарыбыҙҙа һин генә, Башҡортостан!

**Флорида МИҺРАНОВА,**

**М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университеты студенты.**

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АУЫЛ ЙӘШТӘРЕ...

## торлаҡлы булһын, тип

**"2012 йылға тиклем ауылдың социаль үҫеше" Федераль маҡсатлы программаһын тормошҡа ашырыу өсөн 2010 йылда Рәсәй төбәктәре өсөн бүленгән субсидияларҙың яңы күләме билдәләнде.**

Ағымдағы йылда был программаны тормошҡа ашырыу өсөн Башҡортостанда 697 млн 519 мең һум, шул иҫәптән РФ бюджетынан 299 млн 379 мең һум, БР ҡаҙнаһынан 256 млн 590 мең һум һәм бюджеттан тыш сараларҙан 141 млн 379 мең һум аҡса бүлеү ҡаралғайны. Был саралар ауылдарҙа йәшәүсе граждандарҙың торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, йәш ғаилә һәм йәш белгестәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеү, газ һәм һыу үткәреү, фельдшер-акушер пункттары төҙөүгә тотонолорға тейеш. Мәҫәлән, был программа ярҙамында Әбйәлил һәм Мәләүез райондарында икешәр фельдшер-акушер пункттары төҙәләсәк.

Быйыл 428 ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан, уларҙың 267-һе - йәш ғаилә. Торлаҡҡа мохтажлыҡ кисереүсе йәш ғаиләләрҙең күп булыуын иҫәпкә алып, БР Ауыл хужалығы министрлығы тарафынан ағымдағы йылда сығымдарҙы финанслауҙы арттырыу мәсьәләһе лә ҡаралған һәм бюджеттан өҫтәмә рәүештә 14 млн 800 мең һум аҡса бүленгән. Был саралар 43 ғаиләгә йортло булырға ярҙам итәсәк.

# ИҪӘПЛӘҮ ПРИБОРҘАРЫ...

## сығымдарҙы кәметә

**Ҡала округы Советы ултырышында эшҡыуарҙарҙың йылылыҡ, газ һәм һыу счетчиктарына хаҡты саманан тыш күтәреүе һәм ошо юл менән ҡала халҡы иҫәбенә байырға тырышыуы тураһында ла һүҙ барҙы.**

Ҡалала бынан тыш тағы бер проблема күҙәтелә: Өфөнөң ҡайһы бер өлөштәрендә халыҡ фатирҙарына бындай иҫәпләү приборҙары ҡуйырға ашыҡмай. Ҡала округы Советы рәйесе Ирек Ниғмәтуллин фекеренсә, был мәсьәләне хәл итеү өсөн ҡала халҡы араһында "Электр энергияһын һаҡлау һәм энергетик һөҙөмтәлелекте арттырыу тураһында"ғы Федераль закон буйынса аңлатыу эштәре башларға кәрәк.

- Законда энергоресурстарҙы иҫәпләү приборҙарын ҡуйыуҙың ваҡыты аныҡ билдәләнгән. 2011 йылдың 1 ғинуарынан 2012 йылдың 31 декабренә тиклем яңы счетчиктар ҡуйып өлгөрмәгәндәргә, тарифтарҙың даими артып тороуы сәбәпле, күберәк түләргә тура киләсәк.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓"2025 йылға тиклем Өфөлә 12,5 млн кв метр торлаҡ төҙөлөргә тейеш", тигән маҡсат ҡуйҙы Президент Өфө ҡала округы хакимиәте етәкселәре алдына. Әле Өфөлә 20 млн кв метр торлаҡ иҫәпләнә. Тимәк, 2025 йылға тиклем тағы ярты Өфө тиклем майҙанда йорттар төҙөләргә тейеш. Әле республикала йылына 2 млн кв метр торлаҡ төҙөлә. Өфөлә 1 кв метр торлаҡ хаҡы 40 мең һумдан артыҡ, башҡа ҡалаларҙа ла хаҡтар шунан ҡалышмай. Шул уҡ ваҡытта республика уртаса эш хаҡы 16 мең тәшкил итә. Тимәк, торлаҡҡа әлеге хаҡтар бер нисек тә теш үтерлек түгел."Шуның өсөн торлаҡ төҙөүҙе ҡырҡа арттырырға кәрәк, - тине Президент. - Төҙөүселәрҙең был эшмәкәрлегенә арзан һәм оҙаҡ ваҡытҡа кредит биреп ярҙам итәсәкбеҙ. Проценттары 7-8 - ҙән артмаясаҡ. Өфөлә был тәжрибә башланды ла инде".

✓Баш ҡаланың генераль планын төҙөгәндә башҡа мегаполистарҙың күңелһеҙ хаталарын ҡабатламаҫҡа тырышырға кәрәклеген дә һыҙык өҫтөнә алды Президент. Бының өсөн ҡайһы саҡта ҡалала эшләүселәрҙең фекеренә ҡолаҡ һалыу ҙа кәрәк, тине ул. Ысынлап та, бөгөн күптәр балаларын Ҡаҙанға һәм Һамарға аквапаркҡа йөрөтә. Уларҙың үҙебеҙҙә төҙөлөүен көтөп ала алмай халыҡ. Президент ошо мәсьәлә тураһында ла һүҙ ҡатты.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә капиталь төҙөлөш идаралығы начальнигының мәғлүмәте тыңланды. Билдәләнеүенсә, быйыл туғыҙ айҙа Өфөлә 348 мең кв метр торлаҡ төҙөлгән, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 8,3 процентҡа күберәк. Йыл аҙағына тиклем барлығы 580 мең кв метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Тапшырылған майҙандарҙың 207 мең кв метры индивидуаль йорттарға тура килә. Уларға инженер селтәрҙәре төҙөү, газүткәргестәр, электр үткәреү төҙөлөш эштәре менән бергә алып барыла.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, 2011 йылдың 1 ғинуарынан һуғыш, хеҙмәт һәм Ҡоралды көстәр ветерандарына айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме, балаларға айлыҡ пособие күләме 5,9 процентҡа индексациялана.

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН...

## өйрәнергә һәм яҡларға кәрәк!

**(Башы 2-се биттә).**

**Ә хәҙер интернеттағы Президент блогында ошо әңгәмәләге башҡорт теле мәсьәләһенә үҙ фекерен белдергән ҡайһы бер яҙмалар:**

**tagx:** Хәйерле көн! "Газета.ru" өсөн биргән интервьюғыҙҙы кинәнеп уҡыным. Һеҙ, башҡорт телен өйрәнергә теләмәгән кешене ҡолағынан һөйрәп дәрескә килтереү ярамай, тиһегеҙ. Бөгөн беҙҙә башҡорт телен өйрәнеү мотлаҡ, йәғни бала бөтә дәрестәрҙә лә ултырырға тейеш. Югиһә, ул был ваҡытта ҡайҙа теләй, шунда йөрөргә тейешме ни? Ул ваҡытта, бәлки, башҡорт телен өйрәнеүҙе факультативтарға йөкмәтергәләр? Кем теләй - шул өйрәнер, ә теләмәгәндәр өйҙәренә ҡайтып китһен йәки башҡорт теленә ҡарағанда кәрәклерәк башҡа телдә, мәҫәлән, инглиз телен өйрәнһен. Был мәсьәләне тиҙ арала күтәреп сығыу кәрәк, югиһә, ул үҙенә бик күп иғтибарҙы йәлеп итә һәм берәүгә лә кәрәге булмаған шау-шыу тыуҙыра.

**daut55_kor:** Донъя шәхестәренең береһе Гете, кеше күпме тел белһә, уны шунсама тапҡыр кеше, тип атарға була, тигән. Быны мин рус телен үҙемдең туған башҡорт теле һымаҡ уҡ беләм. Рустарға ла, Рәсәйҙең башҡа халыҡтарына ла ихтирам менән ҡарайым. Рустар башҡа телдәрҙе белмәгән берҙән-бер милләт, тиһәләр, миңә ҡыйын булып китә. Йәнәшәндә йылдар буйы йәшәгән кешенең телен белеү бер ҙә насар түгел. Хатта файҙалы ла. Иҫәбе буйынса илдә дүртенсе урында килгән халыҡтың теле бит әле ул. Был телдә өйрәнеү БР Закондарына, РФ Конституцияһына ҡаршы килмәй. Берҙә түгел, ә Рәсәйҙәге ике, өс телдә белеү беҙҙе тағы ла көслөрәк итәсәк.

**daut55_kor:** Милләт булараҡ үҫешер өсөн республика кеүек ҡоролош кәрәк. Һәм Рәсәй тап ана шул үҫештән айырым милләттәр иҫәбенә көслө буласаҡ. Бында башҡаларға бер ниндәй зыян да, ҡаршылыҡтар ҙа юҡ. Мине башҡорттарҙың үҙ туған телен өйрәнеүе мәсьәләһе борсой. Йәғни республиканан ситтә йәшәүсе ярты миллион халыҡ тураһында әйтәм. Беҙгә яҡшы өлгөләргә эйәрергә кәрәк. Шундай бер миҫал бар - Швейцарияла, мәҫәлән, яңылышмаһам, 4 тел һыйышып йәшәй, уларҙың үҫеше өсөн шарттар булдырылған. Улар юҡтан проблема яһап ятмайҙар. Үҙҙәрендәге иң аҙсылыҡты тәшкил иткән француздарға ҡарата туғандарса итәғәтле мөнәсәбәттәләр. Туған телде факультатив рәүештә өйрәнеү, йәғни балалар өсөн өҫтәмә бер йөк итеү - был фарс ҡына түгел. Был кешелек хоҡуғын, РФ Конституцияһын, халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларын һәм, ябай ғына итеп әйткәндә, айыҡ фекерҙе боҙоу, тигән һүҙ. Әңгәмә өсөн рәхмәт!

**anisimova_yana:** Әгәр беҙ Башҡортостанда йәшәйбеҙ икән, беҙ ошо ерҙәге халыҡ телен белергә тейешбеҙ. Бөтә төбәктәрҙең дә үҙенсәлектәрен һәм мәҙәниәтен һаҡларға кәрәк, ә нисек етте, шулай ҡыланырға түгел. Мин башҡорт телен бик насар беләм, һәм миңә бының өсөн оят, сөнки мин бит Башҡортостанда йәшәйем. Эйе, бәлки, башҡорт телен факультатив итеп өйрәнергә лә булалыр, ләкин бындай төр һайлау иреклерен күпселек ата-әсәләр тейешенсә баһаламаясаҡ!

**tagx:** Һеҙҙең менән килешәм. Аҙнаһына бер сәғәт уҡып, имтихан тапшырыу кәрәкмәһә, был бара. Ә инде факультатив менән риза түгелмен.

**jas_7:** Хөрмәтле президент! Һеҙҙең "Ru. Газета"ға интервьюғыҙҙы уҡыным. Киң мәғлүмәт сараларына "кыҙҙырылған" факттар һәм бысраҡ эске кейемдәрҙе ҡаҡҡылауҙан башҡа бер ни кәрәкмәүенә аптырайым. Үкенескә ҡаршы, ошо инде беҙҙең матбуғат баҫмаларының мәҙәни кимәле. Башҡорт телен яҡлап бик тә әйткә килә. Бала күберәк телдәрҙе өйрәнгән һайын, уның хәтере лә яҡшыраҡ була. Элегерәк Ленинградта Пушкиндың йорт-музейында булғанда уның дәрес расписаниеһын күреп аптырағаным хәтерҙә: кескәй Саша рус, француз, немец, латин һәм иҫке славян телдәрен өйрәнгән. Телде өйрәнеүҙә иң мөһиме - уҡытыу сифаты һәм уҡыу әсбаптары. Минең 4 йәшлек ейәнсәрем Таллиннда рус телле балалар өсөн сығарылған китаптан тиҙ генә уҡып өйрәнде. Унда материал бик үҙенсәлекле һәм бала аңына барып етерлек итеп бирелгән. Надежда.

**karkaron:** Хөрмәтле Рөстәм Зәки улы! Башҡортостанда БР һәм РФ Конституциялары тарафынан билдәләнгән ике дәүләт теле булдырылған һәм әлеге ваҡытта бер нәмәне лә үҙгәртеү хәжәте юҡ. Мәктәптәрҙә дәүләт телдәрен өйрәнеү мотлаҡ булырға тейеш. Ләкин мәжбүр итеү, әлбиттә, ярамай. Ялҡауҙар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн шулай ҙа эшләргә була: уҡырға теләмәйҙәр икән - дәрестән ебәреүҙе һорап, ғариза яҙһындар һәм - дүрт яҡтары ҡибла. Әммә дәүләт телен факультатив рәүешенә күсереүҙең бер мәғәнәһе лә булмаясаҡ. Тейешле мәғлүмәткә эйә булмаған наҙан граждандарға шуны белеү ҡамасаулыҡ итмәҫ: БР Конституцияһы һәм РФ Конституцияһы буйынса Федерация составындағы республикалар дәүләт булып тора (Рәсәй Конституцияһының 5-се статьяһын ҡара). Һәм был дәүләттәр үҙ дәүләт телдәрен булдырырға хоҡуҡлы һ.б. Иптәштәр, беҙ хоҡуҡи дәүләттә йәшәйбеҙ икән, рәхим итеп, уның закондарын үтәйек.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# КИЗЕ-МАМЫҠҠА...

## хаҡ артасаҡ икән

**Быйыл мамыҡ йүнләп үҫмәү сәбәпле, донъя күләмендә кизе-мамыҡтан етештерелгән кейем-һалымға хаҡ ҡырҡа артасаҡ. Был шулай уҡ Рәсәйгә лә ҡағыла, ләкин хаҡтар сит илдәрҙән килтерелгән әйберҙәргә генә күтәреләсәк.**

Былтырғы менән сағыштырғанда, Азия илдәренән килтерелгән мамыҡҡа хаҡ 50 процентҡа тиклем артты. Был иң тәүҙә Ҡытай, Һиндостан һәм Пакистан сүстәренә ҡағыла. Донъя күләмендә етештерелгән мамыҡтың яртыһы тап ошо илдәр өлөшөнә тура килә. Һиндостан менән Пакистанда сәсеүлектең күпселек өлөшө һыу баҫыу арҡаһында юҡҡа сыҡһа, Ҡытайҙа уны ҡойма ямғырҙар һәләк итте. Шул арҡала йыйылаһы уңыштың өстән бер өлөшө алып еткерелмәне.

Бөгөн мамыҡ сеймалының бер фунты 1,5 доллар тора. Һуңғы 15 йыл эсендә уның бындай кимәлгә барып еткәне юҡ ине әле. Йәй баштарында ғына әле донъя баҙарында кизе-мамыҡ сүсең тоннаһы 2500 доллар торһа, бөгөн 3306 долларға етте.

АҠШ менән Ҡытай баҙарҙарында урында етештерелгән туҡымаға хаҡтар күтәрелә башлаған хәлдә лә, мамыҡ кризисы ватан етештереүселәрен урап үтәсәк, ти белгестәр. Беҙҙең ил йыл һайын 300 меңгә яҡын тонна мамыҡ һатып ала. Шул уҡ ваҡытта сеймалдың 70 проценты самаһы Үзбәкстан, Таджикстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан һәм Төркмәнстандан килтерелә.

Әйткәндәй, был илдәр ҙә уңышты күпләп йыя алманы, ләкин юғалтыуҙар әллә ни һиҙелерлек түгел. Шулай итеп, илебеҙҙә етештерелгән кизе-мамыҡ кейем-һалымға хаҡтар әллә ни күтәрелмәҫ, тигән өмөт бар. Тик шунһы: бындай тауарҙар Рәсәй әйбер баҙарының ни бары 10 процентын тәшкил итә. Илдә һатылған кейем-һалымдың ҡалғаны, йәғни 70 проценты - Ҡытайҙан, 10 проценты - Төркиәнән һәм тағы ла 10 проценты Европанан килтерелгән кизе-мамыҡ әйберҙәргә хаҡ һис шикһеҙ, хатта ошо ҡыш уҡ, 30 процент самаһына артасаҡ, әлбиттә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА** әҙерләне.

*ПАРАДОКС*

# БАШӘРМЕ, ӘЛЛӘ ӘРБАШМЫ,

## йәки "Сеймал-олатай" ни уйлай?"

Этимология фәнендә ҙур асыш яһаным, йәмәғәт! Ысын. Милләтебеҙ араһында һирәк кенә осраған Бәшәр исеменең килеп сығыу тарихы яп-ябай икән дә. Бәктиһең, "Бәшәр" исеме "башҡорт" һәм "әрмән" һүҙҙәренең тәүге ижектәренән яһалған. Ә ни өсөн "башар" түгел, ә "бәшәр" һуң? Аңлатам: бәктиһең, башҡорт һәм әрмән никахтарынан тыуған балалар барыбер әрмән булып китҡәс, "ә" өнө "а"ны еңә, имеш. Бына һиңә кәрәкһә...

Һәм тағы... Яңыраҡ оҙайлы ваҡыт юғары урында эшләп, дәүләт эшенән китергә мәжбүр ителгән, милләтен һәм республикаһын нисек итеп яратыуын лозунгылар рәүешендә һөйләп йөрөгән бер "ағай" үҙенең ҡыҙын әрмән егетенә кейәүгә биргән икән. Быының менән ул үҙен дәүләт елкәһен кимереүсе итеп кенә түгел, милләтте "кимереүсе" лә итеп күрһәтте. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки һис юғы тоҡомдо дауам иттереү, милләтте ишәйтеү эше менән дә шөғөлләнергә теләмәй үҙ балаларын башҡа милләттәрҙе ишәйтергә бүләк итеүсе "сеймал-олатай". "Ҡыҙ бала ни, кемдә һайлай, шуға сыға инде, үҙенә тиңдәш булырҙайҙы милләттәштәре араһында тапмағандыр", тип тә әйтер берәү. Ә мин был турала икенсерәк уйлайым: бары тик үҙ-үҙен милләтенән өҫтөн ҡуйыусылар ғына милләттәштәре араһынан тиңен таба алмай. Таяҡтың осо барыбер "сеймал-олатай"ға барып тоташа.

Әрмәндәр хаҡында насар уйламайым: ҡаратырыш, берҙә биш итергә тырышҡан егәрле милләт, беҙгә уларҙан күп нәмәгә өйрәнергә лә кәрәк. Үҙ илдәрендә таш та тау, башҡа төрлә байлыҡ юҡ, шуға күрә улар ирекһеҙҙән көнөнән донъя ҡыҙыра, йәшәү мөхитен киңәйтә. Тик бына "сеймал-олатай" ейән-ейәнсәрҙәренең милләтен кем итеп күрергә теләй икән: "башәр"ме, әллә "әрбаш"мы? Милләтебеҙҙә Бәшәр исемле кешеләр тағы ла артасаҡ, йәмәғәт!

**Нух БАЕВ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Йөрәк, ҡан тамырҙары сирҙәре



Ике аҙна буйы түбәндәге үлән ҡушылмаларын эсеп алыу хәлде бермә-бер яҡшырта. Һәр варианта ла үләндәрҙе 1-әр балғалаҡ алып 1 стакан ҡайнар һыу менән бешекләп тәнәткәс, 1/3 стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Был дауалау курстары кешенең бөтән ағзаларына ла тәьҫир итеп, уларҙы һауыҡтыра.

1. Һарыүҙ (золототысячник), йүкә сәскәһе, бесәй үләне (валериана) тамыры;

2. Ҡайын япрағы, ҡарағай бөрөһө (сосновые почки), бәпембә тамыры;

3. Арыҫлан ҡойроғо үләне (пустырник), юл япрағы үләне, һары мәтрүшкә;

4. Сенна үләне (лист сенны), эвкалипт, пәйғәмбәр тырнағы (календула).

### Йүткереүҙән дауа

Йүткерә башлағас та 20 грамм андыҙ тамырына ярты литр ҡайнар һыу өҫтәп, 3-4 минут талғын утта ҡайнатып, тәнәтергә һәм йыйылмыс ҡына итеп көнөнә 3 тапҡыр яртышар стаканлап эсергә. Дауаны 5-7 көн дауам итергә. Хроник ҡурылдай (бронхит) булып, оҙайлы йүткереү йонсотһа, 10 грамм андыҙ тамырын ярты литр ҡайнаған һыуҙа тәнәткәс, шулай уҡ яртышар стаканлап көнөнә өс тапҡыр эсергә. Дауалау курсын 10-20 көн дауам итергә. Йүткереү мәлендә тәмәкеселәргә тәмәке тартыуҙы туҡтатып тороу ҙа яҡшы.

### Ангина

Ангина башланып ҡына торған сағында 1-әр балғалаҡ шалфей, юл япрағы үләнен 1 стакан ҡайнар һыуҙа тәнәтеп, көнөнә 5-6 тапҡыр тамаҡты сайҡатырға. Унын арahында 1 балғалаҡ эвкалипт япрағын 1 стакан ҡайнар һыуҙа тәнәтеп, көнөнә өс тапҡыр тамаҡты сайҡатығыҙ.

### Һалҡын тейгәндә

Эмаль һауыттағы ярты литр ҡайнар һыуға 5-6 тамсы аҡ шыршы (пихта) майы тамыҙып, башты одеал менән ҡаплап ошо ҡайнар быу менән 5-10 минут тын алырға. Күкрәккә, табанға, балтырға майҙы һөртеп, йөндән бәйләнгән йылы кейем кейергә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Сәләмәтлек ҡәҙәр ҡиммәтле һәм ләззәтле һис бер нәмә юҡтыр, быны иһә сәләмәт ваҡытығыҙҙа белегеҙ. Етем хаҡтарына ҡул һуҙмағыҙ, күршеләрегеҙ менән яҡшы тороғоҙ, мөмкин булһа, мәсеткә барығыҙ.*






## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Икенсе өгөт

Күҙебеҙгә шундай зиннәтле булып күренгән донъя хыянат, алдау, йәбер һәм золом кеүек насар нәмәләрҙе күрһәтә. Әхирәттә бер көн Аллаһы Тәғәлә алдына барып, һәр бер яҡшы һәм яман эштәребеҙ өсөн яуап һәм хисап бирәсәгебеҙҙе онотмағыҙ. Әхирәттә мәсхәрәгә төшөрәсәк, дуҫ һәм дошман араһында йөҙ ҡыҙартасаҡ нәмәләрҙе эшләмәгеҙ. Матур холоҡтарға өйрәнегеҙ, тоғро юлдан, ҡаршылыҡтар осраһа ла, айырылмағыҙ. Донъя йәһәтенән үҙегеҙҙән түбәндәргә һәм дин йәһәтенән үҙегеҙҙән бөйөктәргә ҡараһағыҙ, донъяла һәм әхирәттә бәхетле булырһығыҙ. Изгелек орлоҡтары сәсһәгеҙ, бәхет игендәре урырһығыҙ. Матур холоҡло кешеләргә юлдаш булығыҙ, улар һеҙгә түбәнгә төшкән ваҡытығыҙҙа һәм ҡыйырһытылғанда күтәрелергә ярҙам итерҙәр. Боҙоҡ холоҡтарҙан йыраҡ булығыҙ, сөнки уларҙан хәйер күрмәҫһегеҙ, улар дәрәжәгеҙҙән төшөрөрҙәр, аманатығыҙға хыянат итерҙәр һәм серҙәрегеҙҙе фаш итерҙәр. Гонаһтарығыҙ өсөн үкенегеҙ һәм Йәнәб-и Аллаһҡа етешһеҙлектәр менән булһа ла ғибәҙәт итегеҙ. Пәйғәмбәренә мөхәббәт һәм хөрмәт күрһәтегеҙ. Бәләләрҙән сабырлыҡ һорамаҫ элек Аллаһы Тәғәлә хәҙрәтенән бәләләрҙән һаҡлауын һорағыҙ. Сабырлыҡ бирергә ҡөҙрәте булған Аллаһы Тәғәләнең бәләләрҙән иҫәнлек бирергә лә ҡөҙрәте барҙыр. Сәләмәтлек ҡәҙәр ҡиммәтле һәм ләззәтле һис бер нәмә юҡтыр, быны иһә сәләмәт ваҡытығыҙҙа белегеҙ. Етем хаҡтарына ҡул һуҙмағыҙ, күршеләрегеҙ менән яҡшы тороғоҙ, намаҙҙарығыҙҙы ҡалдырмағыҙ, мөмкин булһа, мәсеткә барығыҙ. Бер-берегеҙҙең хәлен белешеп тороғоҙ, изгелек менән бойороғоҙ һәм бер-берегеҙҙең уҫаллыҡҡа ҡаршылыҡ күрһәтегеҙ, аҡылһыҙҙар менән дуҫ булмағыҙ. Яҡшы мөьмин булғығыҙ килһә, Аллаһы Тәғәлә юлынан барығыҙ. Баҙарҙарҙа заруратһыҙ йөйылышып һөйләшеп ултырмағыҙ. Халыҡ йома намаҙына барғанда, һеҙ сәфәргә сығып китмәгеҙ. Юҡбар нәмә өсөн асыуланмағыҙ. Кешеләрҙең яҡшылығы һәм бәхетенә һис бер ваҡытта хәсәт итмәгеҙ (көнләшмәгеҙ). Хәсәт итеүҙең выжданды рәхәтһеҙләндереп тороуҙан башҡа файҙаһы юҡ. Үлемдең киләсәген иғтибарҙан ситкә ҡуймағыҙ, һәр ваҡытта, һәр сәғәттә үлем килеүе мөмкин. Аллаһы Тәғәләгә яҡынлаштырасаҡ нәмәләрҙең әхирәттә уттан йыраҡ итеүен һәм утҡа яҡынлаштырған нәмәләрҙең Аллаһы Тәғәләнән йыраҡ итәсәген һәр ваҡыт күнелегеҙҙә тотоғоҙ.

**(Дауамы бар).**

ҠОТ

# ҠОЛҒАНА ХАЗИНАҺЫ

**Бәй, Ҡолғанала берәй төрлө хазина тапҡандармы, тиеп аптырар берәү мәҡәләмдең башын уҡығас. Юҡ, һүҙ төптә ҡаҙылма байлыҡтар, алтын-көмөш хаҡында бармай. Яҙаһы һүҙем - терегөмөштәй теремек, теле тәтелдәп, аяҡтары бейеп, күҙҙәре нур бөркөп торған ҡураныс ҡына картәй, әммә оло йөрәкле рухи хазина - Зәйтүнә әбей хаҡында.**

82 йәшлек инәй бөгөн булһа урманҡырҙар ҡыҙырып, үҙе әйтмешләй, ағасты һындырырға йәлләп, муйыл йыйғанда ағас башына менеп, йырлап ултыра. Биҙрә-биҙрә әлморонон, муйылын йыйып алған, бер табаҡ итеп орлоҡ һуҡҡан, эркетен ҡайнатып, ылашында ҡоротон ыҫлап, көрөҫ-тарағында аллы-гөллө балаҫтарын һуғып, уларын хәҙер үҙ улҡыҙҙарына ғына түгел, ейән-ейәнсәрҙәренә, бүлә-бүләсәрҙәренә баярҙап ултыра. "Әнәне лә күҙлекһеҙ һаплайым, зыйлатып теген машинкаһында ла тегәм, минең ҡораған ҡорамаларҙың, һырыған түшәк-юрғандың, һуҡҡан балаҫтарҙың, баҫҡан кейеҙҙәрҙең иҫәбе-һаны юҡ, әле булһа йөн иләп, бәйләм бәйләп ултырам - эшһеҙ нисек сыҙамаҡ кәрәк?! " - ти инәй, үҙенән-үҙе үтә ҡәнәғәт булып.

Зәйтүнә инәйҙең яйлап атлап йөрөгәне лә юҡтыр: ике баҫаһын бер баҫып, һәр саҡ нимәгәлер ҡабаланып, өтәләнеп, улай ғына ла түгел, бала-сағаларын да өтөп-ҡырып йөрөй ул. Фәрештәләре осортоп алып йөрөй, тип тә уйларһың.

Һиммәтле һикһән икеһендә унын хәләхүәле ошолай. Юҡ, тотош ғүмер юлы, ҡылған эштәре һоҡланырлыҡ, күптәргә өлгө булырлыҡ унын. 1929 йылда донъяға тыуған Зәйтүнә инәй өлөшлө бала - бер-береһе өсөн яратылған Ғәлимйән менән Нәкиәнең бер бөртөгө, күҙ терәп торғаны була. 3 йәшендә генә атайҙан етем ҡала. Атаһы үлер сағында әсәһенә васыят әйтеп ҡалдыра: "Нәкиә, минең сантиметрымды сит-яттарҙан ҡаҡтырып-һуҡтырма, үгэй атай ҡулына ҡалдырма", - ти. Атаһы, бахыр, кәүҙәгә бәләкәй булғанға, ҡыҙын, яратып, "сантиметрым" тип йөрөткән була. Иренә биргән һүҙенә тоғро ҡала әсәһе - 34 кенә йәшендә тол ҡалһа ла, бүтән иргә сыҡмай, балаһын иргә алмаштырмай. Йәндәй күргән ғәзизенән яҙған тол ҡатын яңғыҙ ҡыҙын эшкә сапсан, үҙенә талапсан, сос, аҡыллы итеп тәрбиәләй. Ҡыҙының танауына еҫ инә башлағас, үҙ талабын ҡуя: тормошҡа мине көтөрлөк кешегә сығаһың. Әсәйҙеке - закон, тип өйрәнгән Зәйтүнәгә егәрле ҡыҙға күҙе төшөп килгән күп кенә яусыларҙы кире ҡағырға, аттарын борорға тура килә. Ниһайәт, Хоҙай уға тиң йәрҙе, әсәһен ҡыйығы аҫтына ғына түгел, ҡанаты аҫтына алып көтөрлөк ир-уҙаманды - фронтовик Яҡупов Мөхәммәтша Ғәзелша улын насип итә. Ҡаҙмаш ауылы уҙаманы Мөхәммәтша апаның бала сағында уҡ тифтән ата-әсәһе үлеп ҡалғас, уны Сөләймән олатаһы алып көтә. Ҡыҙ туғандарын приютҡа тапшыралар. Шул мәлдән улар менән бәйләнеш өҙөлә. Ына шулай, ике етем бер бөтөн булып, бер-береһенең күңелен аяп-күрсып, барын үрсетеп, юғына бошонмай, 50 йыл да 2 ай йәшәп ҡала. Һоҡланғыс ғүмер юлы кисерә улар. Шалҡандай 5 улға, һыу һөләгәндәй 3 ҡыҙға ғүмер һәм тәрбиә бирәләр, тормош тигән оло юлға ныҡлы ҡанаттар ҡуйып осоралар. Әбйәлил районы Әбделғәзе ауылында йәшәгән Әнисәләре - 3, Аҫҡарҙағы Гөлсөмдәре - 3, Рауилдары - 2, Мараттары - 2, Люциәләре - 2, игеҙәктәре Фәрит менән Сәғит тә 3-әр балаға атай-әсәй булып, уларҙың балалары башлы-күҙле булыу сәбәпле, күптән Зәйтүнә инәйҙе ҡартәләсәй итеп бөткәндәр.

" Итегемде үҙем кейәм,
Ситегемде кем кейә?
Үҙем үлеп китте ниһәм,
Яҡубымды кем һөйә?" - тип йырлап йөрөй инем, бабайым үлде лә китте, э-э-эй һәйбәт кеше ине бит ул, тип хәтирәләргә бирелә инәй. Әйткәндәй, Зәйтүнә инәйҙең таҡмаҡ сығарыу һәләте лә бар. Торған ерҙән күҙенә ҡарап, һинә таҡмаҡ та сығара, көйләп тә ебәрә. "56 шиғырым бар, 100-гә етһә, һинә ебәрәм, таҡмаҡтарым 300-ләптер", - ти ул.

Зәйтүнә инәй оҙайлы хеҙмәт юлы үткән. Артелдә, колхозда ағас эшендә лә эшләгән, Хәмит ағында бүрәнә йығып, йүкә һыҙырып, булған эште һыпырып эшләп йөрөгән. Сайыр һыҙыуҙан башҡа эшләмәгән эше юҡ, тиһән дә була. Һуғыш осоронда ҡорсанғы аттарҙы ыҫлап, үгеҙ егеп тә йөрөйҙәр. Ире 16 йыл магазинда һатыусы булып эшләгән дәүерҙә ул йыйыштырыусы була. Әле, үҙе әйтмешләй, ҡайҙа һәйбәт ашаталар, ҡәҙерхөрмәтте күберәк күрһәтәләр - шунда йөрөй. Ҡолғаналағы 3 улында йүгереп йөрөп йәшәй, шулай ҙа төп нигеҙҙә - Рауил ағайҙа күберәк була. Ураҙаһын ҡалдырмаған әбей Рамаҙан айынан һуң Сәғиттәге кесе өйөнөң иҙән-соланын да үҙе шаллап алған. 25 саҡырымлыҡ Ҡаҙмаштан сейә йыйып, шуны йөкмәп ҡайтып төшкән. "Фәриткә, килеп ал, тип әйткәйнем. Ығышып йөрөгәс, йәйәү һыпырттым, ауылға етәрәк күренгәйне, юрамал боҫоп, йәшенеп ултырып ҡалдым", - тип һөйләй көлөп. Мәсетле, Өфөнө ҡалдырмай, балаларына йөрөп ята. Стәрлегә Руслан ейәнемдең дәресен тыңларға барып ҡайттым, ти унан ҡалһа.

Тағы бер хазиналығы бар әбейҙең - ҡолғаналар ҡорған бер тирмәнән ҡалмай, тирмә йәме, ырыу йәне булып, ил гизеп, һабантуйҙарҙы, байрамдарҙы ҡалдырмай йөрөй. "Президентты ла, төрлө ҡунаҡтарҙы ла ҡаршылаған бар, хатта Конгресс-холда ла сығыш яһаным", - тип ебәрә.

Яныраҡ тағы бер ҡыуаныс кисергән инәй - торлаҡ сертификаты алған. Өфөгә буй етмәне, Аҫҡар йә Магниттан алам инде өйҙө, Алла бирһә, ти. "Хөкүмәткә рәхмәт - пенсияһын биреп тора, ауыл, район хакимиәттәренә лә, мине яҡшы ҡараған балаларыма ла, Хоҙайыма мең шөкөр, мин етемде сикһеҙ бәхетле итте", - тип алҡышлана инәй.

Эйе, мин был мәҡәләмдә Ҡолғана хазинаһы Зәйтүнә инәйҙе бар ҡиммәт-баһаһында асып та бөтә алмағанмындыр. Хазина бит һаҡлауға, яҡлауға мохтаж. Ауыл күрке был инәйҙе Хоҙай үҙе һаҡлаһын - баһаһы йылдарға, милләткә етер...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Билдәле булыуынса, XX быуат башына Рәсәй империяһы халҡының тос өлөшөн (бәғзе авторҙар раҫлауынса, 40 процент тиерлек) балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр тәшкил иткән. Беҙҙең төрки-мосолман халыҡтар араһында, милли төбәктәрҙә үҫмерҙәрҙең һәм йәштәрҙең өлөшө айырыуса ҙур булғаны статистик факт.**

# КОМСОМОЛДАН АЛДА ТЫУҘЫ...

## Башҡорт йәштәре иттифаҡы

1920 йылдың август айындағы халыҡ һанын иҫәпкә алыу мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Көньяҡ Урал төбәгендә, хәҙер инде туғандаш Ҡаҙағстанға ҡараған Аҡтүбә һәм Ҡустанай губерналарын да индереп иҫәпләһәк, теүәл 6 миллион кеше йәшәгән. Шуларҙың 50 процентын урыҫтар, 20 процентын - башҡорттар, 9,5 процентын - ҡаҙаҡтар, 7 процентын - украиндар, 6,6 процентын - татарҙар, 1,5 процентын - марийҙар, 1,4 процентын - сыуаштар, 1,3 процентын - мордвалар, 0,9 процентын - немецтар һ.б тәшкил иткән. Төбәк халҡының 89,7 проценты ауылдарҙа йәшәһә, 10,3 проценты ғына ҡалаларҙа йәшәгән. Башҡорттар һәм ҡаҙаҡтар тулыһынса ауыл халҡын тәшкил иткән.




1920 йылда Башҡорт автономиялы совет социалистик республикаһында, йәки "Кесе Башҡортостан"да 1,1 миллионға яҡын кеше йәшәгән. Башҡорттар 372 мең (36,8), урыҫтар 341 мең (33,8), татарҙар 187 мең (18,5) булған. Күрше Өфө губернаһында 2 миллиондан ашыу халыҡтың 807 меңе башҡорт (40,1 процент), 794 меңе урыҫ (39,4 процент), 104 меңе татар (5,2 процент) булған. 15 йәштән 24 йәшкәсә булған йәш-елкенсәк Башҡорт АССР-ында 153 меңдән ашыу (15,1), Өфө губернаһында - 285 меңдән артығыраҡ (13,1) булған. Бында 18 йәштән алып ир-егеттәрҙең Аҡ һәм Ҡыҙыл армиялар сафтарында фронттарҙа булыуын да иҫтә тоторға кәрәк. Мәҫәлән, Башҡорт АССР-ында 10-19 йәштәрҙәге балалар һәм үҫмерҙәр һаны 246 735 кеше тәшкил иткән булһа (бөтә халыҡтың 25 проценты тиерлек), ә бына 20-24 йәштәрҙәгеләре ни бары 49 892 (4,5) булған.

Башҡорт йәштәре, башҡа мосолман-төрки халыҡтары йәштәре кеүек, үҙҙәренең күренекле милли мәғрифәтселәре (М.Аҡмулла, М. Өмөтбаев, С.Яҡшығолов, Р.Фәхретдинов) идея-рухи йоғонтоһонда үҙаллы хәрәкәткә ойоша. Бында би- герәк тә йәҙитсе зыялыйҙары (З.Рәсүлев, З.Камали, С.Мерәсов һ.б.) һәм башҡорт мәғрифәтселәренең йәш (ғәмәлдә иһә, һуңғы) быуыны вәкилдәренең (Ғ. Рәсүлев, Ә.З.Вәлидов, Һ.Тереғолов, Н.Ә.Таһиров) йоғонтоһо ҙур. XX быуаттың башында "Хөсәйениә", "Рәсүлиә", "Мөхәммәҙиә", "Ғосманиә", һуңыраҡ "Ғәлиә" мәҙрәсәләре, йәҙитселек һәм тәриҡәт мәҙәни усаҡтары булараҡ, уҡыусы һәм уҡытыусы йәштәр хәрәкәтенең үҙәктәренә әүерелә. Башҡорт милли хәрәкәте лидерҙарының һәм уның әүҙем ағзаларының күпселеге, артабан Башҡорт АССР-ы етәкселәренең, башҡорт милли зыялыларының күбеһе революцияға саҡлы ошо үҙәктәрҙә тәүге ижтимағи-сәйәси тәжрибә алған.

Һан яғынан уҡыусы йәштәр һәм йәш зыялылар, тәбиғи, крәҫтиән эшсе йәштәрҙән күпкә ҡалышҡан, ләкин ижтимағи әүҙемлеге һәм сәйәси һәләтлелеге менән ғәйәт өҫтөн торған. Айырыуса Ырымбур, Өфө, Силәбе, Стәрлетамаҡ, Троицк ҡалаларында йәштәр ойошмалары әүҙем эшләй. Хатта башҡорт-татарҙар аҙ булған ҡалаларҙа ла ауылдан уҡыуға килгән милли йәштәр хәрәкәткә килә. Мәҫәлән, Бөрө ҡалаһында революцияға тиклем ике мәсет булған. Иҫке мәсет эргәһендә Насибулла хәҙрәт быуат башында уҡ беренсе мәҙрәсә асҡан. Һуңынан мәҙрәсәлә йәҙитсе, урыҫ уҡыусылары берлегенән үрнәк алып, әҙәби-ағартыу түңәрәге ойоштора.

Минең иҫәпләүемсә, революциянан һуң беҙҙең Урал-Иҙел буйҙары регионында, башлыса ҡала-ҡасабаларҙа, тиҫтәнән ашыу милли йәштәр союздары барлыҡҡа килә. Шулар араһында Рәсәй комсомолына тиңләрлек ике ойошманы атарға була. "Берек" татар йәштәр иттифаҡы (1917 йылдың 17 июнендә Ҡаҙанда төҙөлгән) һәм "Тулҡын" башҡорт йәштәр берлеге (1917 йылдың 18 декабре, Ырымбур). Был милли союздар, комсомол кеүек үк, юғары кимәлдә ойошҡанлығы менән генә түгел, ә ҡыйыу сәйәси-ижтимағи әүҙемлеге, үҙ милләте мәнфәғәттәре өсөн һөҙөмтәле фиҙәкәр эшсәнлеге менән дә айырылып торған. Был йәштәр ойошмалары милли хәрәкәттәр күтәрелеше осоронда, комсомолдан байтаҡ алда, донъяға килә һәм улар менән бергә монархист аҡтарға һәм интернационалист большевиктарға ҡаршы тиңһеҙ ҡанлы көрәштә һәләк була. Ә эшсе-крәҫтиән йәштәре союздарынан Коммунистар партияһы етәкселегендә төҙөлгән комсомол уның менән тыныс ҡына ете тиҫтә йыл йәшәп ғәйеп була.

1917 йылдың ахыры, 8-20 декабрендә (яңыса 21 декабрь - 1918 йылдың 2 ғинуары), Ырымбурҙа бөйөк тарихи ваҡиға - Өсөнсө Бөтә Башҡортостан (Ойоштороусы) ҡоролтайы булып уҙа. Тулы вәкәләтле милли форум автономиялы (мөхтәри) Башҡорт Республикаһын раҫлай, ошо мәлдән башҡорттарҙың милли дәүләте рәсми һәм легитим рәүештә йәшәй башлай. Ошо бөйөк йыйылыш бөтә Башҡортостан йәштәре берлеген дә ойоштороусы була. Ҡоролтай эше барышында уның бер төркөм йәш вәкилдәре һәм йәштәрҙең төбәк ойошмалары етәкселәре 18 (31) декабрҙә башҡорт йәштәренең ойоштороу йыйылышын үткәрәләр. Бына ошо йыйылышта (һуңынан, "ойоштороусы конференция" тип тә атанылар) тантаналы рәүештә Башҡорт йәштәре берлеге (союзы) ойошторолоуы хаҡында иғлан ителә. Ҡыҙыу бәхәстәрҙән һуң беренсе бөтә Башҡортостан йәштәр союзына "Тулҡын" тигән исем бирелә.

Йәштәр хәрәкәте тарихы ифрат әһәмиәтле һәм фәһемле. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башҡорт йәштәре хәрәкәтенең тарихына иғтибар тейешенсә түгел. Ғәмәлдә, "Тулҡын" башҡорт йәштәре иттифаҡы өйрәнелмәгән. Советтар осоронда монополия тотҡан ВЛКСМ-дың тарихында милли йәштәр ойошмаларына урын булманы. Әле һаман шулай. Бына әле лә Башҡортостанда бөтә республика комсомол ойошмаһы төҙөлөүҙең 90 йыллыҡ юбилей тантанаһын билдәләйҙәр.

Шулай итеп, минең тәҡдим шул: 29 октябрь - Рәсәй комсомолы тыуған көн икән, 31 декабрь - Башҡорт йәштәре иттифаҡы тыуған көн. "Тулҡын" башҡорт йәштәре берлеге ойошторолған көндө - 31 декабрь көнөн - иҫтәлекле дата тип иғлан итергә кәрәк.

**Рияз МӘСӘЛИМОВ.**
**Бөрө ҡалаһы.**

*ӘЙТӘГҮР!*

# ТЕЛЕФОНДАН ҺӨЙЛӘШЕҮҘЕҢ ДӘ...

## үҙ ҡағиҙәһе барлығын беләме йәш кеше?

**Ҡала транспортында китеп барам. Ғәҙәттәгесә халыҡ менән "шығырым тулы" тиһәм дә була: бөтәһенең дә эштән, уҡыуҙан ҡайтҡан сағы. Былай ҙа тынсыу, тығыҙ автобуста, кешеләрҙең тыныслығын боҙоп бер йәш егет телефондан һөйләшә. Әҙәбен белеп кенә һөйләшһә, артыҡ аптырамаҫ инең, ә ул телефон аша кем менәндер ирешә. Йәмәғәт транспортында телефон аша йәки үҙ-ара ҡысҡырып һөйләшеүселәр тураһында гәзит уҡыусылар ни уйлай?**

**Ләйсән АБДУЛЛИНА:** Мин үҙем транспортта ғына түгел, ғөмүмән, кеше булған урында телефондан һөйләшергә яратмайым. Шундай һөйләшеүҙәрҙең шаһиты булһам: "Һуңға ҡалдырып булмағас, әллә шул тиклем мөһим эш микән", - тип уйлап ҡуям. Теләмәһәң дә һөйләшеүҙәре ҡолаҡҡа үтеп инә шул. Автобуста ҡысҡырып һөйләшеү тыйыла, тигән программалар булһа, яҡшы булыр ине, тип уйлайым да ул. Ләкин автобустарҙа ололарға урын биреү кеүек ябай ғына ҡағиҙәләрҙе лә тәртипкә һалып булмай бит әле. Автобуста тәртип булһын, кешеләр бер-береһен ихтирам итһен, тигән талапты һәр автобус хужаһы үҙе атҡарһа, ҡана ла һуң. Сит илдә автобусҡа ингән һәр кешенең күҙ алдында иҫкәртеү тамғалары тора. Мәҫәлән, "Шым һөйләшегеҙ", "Ашарға ярамай". Был ҡағиҙәләрҙе бөтәһе лә үтәй, автобус шул тиклем тыныс, ял итә-итә юлыңды дауам итәһең. Беҙҙә лә "Тәмәке тартмаҫҡа", "Ирешмәҫкә" тигән яҙыуҙар бар, шуларға "Шым һөйләшегеҙ" тигәнде лә ниңә ҡушмаҫҡа? Кеше барыбер уҡый, иғтибар итә бит ул.

**Самат ҒӘЛИЕВ:** Беҙҙә хәрәкәт көслө, водителдәр ҙә арый. Әммә шул хаҡта уйлап тормай, ҡайһы бер пассажирҙар төрлө сәбәп табып, водителгә быҫраҡ һүҙҙәр яуҙырырға ашыға: "Нимә утын кеүек йөрөтәһең", "Йөрөтә белмәйһең", "Туҡта, тип әйттем бит" һ.б. Кемделер тәнҡитләр алдынан иң беренсе үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарау мөһим. Миндә лә водителдәргә ҡарата ризаһыҙлыҡ уянғаны бар ул, ләкин эшләп йөрөгән кешегә агрессия өҫтәмәйем, тип, бер ҡасан да ҡысҡырып ултырғаным булманы. Киреһенсә, автобустан төшөр алдынан рәхмәттәр әйтеп төшөп китәм. Нимә генә тимә, һөйләшеү этикаһы беҙҙә юҡ шул. Автобуста йөҙөндә йәмерәйтеп, башҡаларҙы тәнҡитләп ултырыу ҙа, ҡысҡырып һөйләшеү ҙә йәмһеҙ күренеш.

**Илгиз ХӨСӘЙЕНОВ:** Транспортта йөрөүҙең яҙылған һәм яҙылмаған ҡанундары бар, тик күптәр был турала онотоп ебәрә. Мәҫәлән, ололарға йәки ауырлы ҡатындарға урын биреү, урын биреүселәргә рәхмәт әйтеү, кешеләрҙең аяғына баҫмаҫҡа, янында торған кешегә һөйәлмәҫкә, арҡа менән этәрмәҫкә һ.б. Был ҡағиҙәләргә телефон аша йәки үҙ-ара шым һөйләшеү ҙә керә, әлбиттә. Әммә ҡайһы берәүҙәр хатта телефон аша сәғәтләп һөйләшеп ташлай. Бөтә проблемаларын, хәлен егермеләгән кеше ишетеп тороуынан уңайһыҙланмайҙар ҙа әле улар. Хахылдап көлөп тә, илап та алалар, тигәндәй. Уның өсөн һин уңайһыҙлыҡ кисергән осраҡтар ҙа була. Был хәлде нисек яйға һалырғалыр, белмәйем. Минеңсә, тәрбиә һәр ваҡыт йәштәрҙән башлана бит инде. Бәлки, мәктәптәрҙә, университеттарҙа "Транспортта этикет ҡағиҙәләре" тигән һөйләшеүҙәр ойошторорғалыр? Минеңсә, был фекер алышыуҙарҙың ниндәйҙер кимәлдә файҙаһы тейер ине.

**Рита БИКБАЕВА:** Бер ваҡыт районыбыҙҙан баш ҡалаға килгәндә шундай хәлгә шаһит булғайным: ике ҡыҙ юл буйы һөйләшеп, шарҡылдашып, көлөшөп килде. Әҙәбен белеп кенә һөйләшһәләр, бер һүҙ ҙә әйтмәҫ инем. Мин, ғәҙәттә, аптырап тормай, ипләп кенә киҫәтеп әйтеп ҡуям. Уларҙы ла киҫәттем. Шунан ҡыҙҙар шымды.

Бының кеүек әҙәп, әхлаҡ ҡағиҙәләре, минеңсә, ғаиләлә, мәктәптә тәрбиәләнергә тейештер. Кеше халыҡ араһында ҡысҡырып һөйләшә икән, тимәк, ул үҙ-үҙен хөрмәт итмәй. Үҙен хөрмәт иткән кеше иң беренсе башҡалар алдында тәртипле булырға, әҙәп һаҡларға тейеш, минеңсә. Шуға күрә, әгәр үҙегеҙҙе яратаһығыҙ, хөрмәт итәһегеҙ икән, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләре тураһында онотмағыҙ.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

*✔ Аҙаҡ уларҙан хат килде. "Рәсәйҙә башҡорт тигән үтә ҡунаҡсыл халыҡ бар икән, шуны ла белмәй йәшәгәнбеҙ. Бар булған таныш-белешкә һеҙҙең турала һөйләп иҫебеҙ китә", тип яҙғандар.*



**Бөгөнгө көндә, сәфәр сығам, тиһәң, мөмкинлектәр бермә-бер артты. Сит ил паспорты алыу мәшәҡәт түгел, ҡайһы бер илдәргә визаһыҙ ҙа барырға була. СССР осорондағы тимер ҡоршау емерелгәндән һуң иркен тын алғандай булдыҡ, иншалла. Теләгең булһа, мөмкинлегеңә ҡарап, сәйәхәт ит, әйҙә. Бер генә әтнәкәһе бар был иректең: кесәң ярап торһа ғына. Әммә теләгән яйын таба, теләмәгән сәбәп эҙләй, тигәндәй, өйҙә ҡурҡып-боҫоп ултырмайынса, сит тарафтарҙы һә тигәнсе урап ҡайтҡан мосафирҙарҙың һаны арта бара. Әбйәлил районының Хәлил ауылынан ирле-ҡатынлы Венера һәм Зәкир Ниғмәтуллиндарҙың Испанияға барып ҡайтыуҙарын ишеткәс, уларҙың хәл-әхүәлен белешеп, тәьҫораттары менән уртаҡлашмайынса булдыра алманыҡ. Ҡыҙыҡ та инде. Хәйер, һүҙҙе уларҙың үҙҙәренә бирәйек.**

# СИТ ИЛДЕ МАҠТА ЛА...

## тыуған илеңдә йәшә

**Зәкир.** Ҡатыным менән беҙ бик күп ерҙәрҙә булдыҡ. Молдавияны барып күрҙек. Литва, Белоруссия, Үзбәкстан республикаларына сәйәхәт ҡылдыҡ. Ҡара диңгеҙ буйына барып ял иттек. Улыбыҙ әрмелә хеҙмәт иткән Алыҫ Көнсығышҡа тиклем сәфәргә сыҡтыҡ. Мәскәүҙең үҙендә генә әллә нисә тапҡыр булырға тура килде. Умартасылыҡ менән шөғөлләнгәс, килеме лә була торғайны. Әйбер йыйып мәшәҡәтләнмәнек, аҡса туплай ҙа, ер-һыу күрергә сығып китә инек. Ҡатыным Молдавияла ял иткәндә үҙем алып барып, үҙем алып ҡайттым. Шулай итеп, СССР бар ваҡытта уҡ күп төбәктәрҙе күреп ҡалдыҡ.

**Венера.** Ситтә йөрөгәндә ил менән генә танышмайһың, иң тәүҙә халҡына иғтибар итәһең. Төрлө ерҙәге халыҡ төрлөсә ҡабул итә һине. Молдавияла санаторийҙа булған саҡта бер украин ҡатыны менән бергә ял иттек. Шул ҡатын менән Кишиневтағы бер молдаван ғаиләһендә ҡунаҡта булдыҡ. Эй, шул хәтлем һәйбәт ҡунаҡ иттеләр. Шундай яҡшы кешеләр булып сыҡты улар, матур итеп оҙатып ҡалдылар. Литвала ундай ҡунаҡсыллыҡ юҡ, ҡунаҡхананан да урын бирә һалып бармайҙар, ситтән килгәндәргә һалҡын ҡарайҙар. Белоруссияның Гродно ҡалаһында йөрөп ятҡанда бер ҡатындың башымдағы шәлгә күҙе төштө. "Миңә лә шундай шәл кәрәк ине", - ти. Ирем: "Кәрәк булһа, бынан да һәйбәтерәген ебәрә алабыҙ", - тине. "Улайһа, әйҙә, үҙебеҙгә ҡунаҡҡа алып ҡайтам", - ти был. Беҙ вокзалда ултырып арығайныҡ, шуға шатланып риза булдыҡ. Барғайныҡ, был ҡатындың ире, ниндәй таныш булмаған кешеләрҙе саҡырып ҡайтҡанһың, тип, башта ризаһыҙыраҡ ҡаршы алды. Шулай ҙа, танышып киттек. Ире поляк икән, йайлап уныһы ла ипкә килде. Кискеһен былар өйҙәрен беҙгә ҡалдырып, үҙҙәре ҡайҙалыр ҡунаҡҡа киттеләр. Беҙ ни, юлда йөрөп арыған кешеләр, ваннала йыуынып, йайлап ял иттек. Тағы ике көн ҡунаҡ булып, үҙҙәрен саҡырып ҡайтып киттек. Ҡайтҡас, быларҙан телеграмма килде. "Магнитогорск аэропортынан ҡаршы алығыҙ", тигәндәр. Ҡаршы алдыҡ. Ҡайтышлай үткән юлыбыҙҙы күреп ҡайтабыҙ, тигәстәре, ҡайтыуҙарына билетты поезға алдыҡ. "Аҙна-ун көн ҡунаҡ булмайынса ҡайтмайһығыҙ", тибеҙ. Ире: "Юҡ, беҙ ун көндө нисек үткәрәбеҙ, ашарға ул хәтлем ҡайҙан табабыҙ?" - ти. Мин әйтәм: "Юҡ, һеҙҙән бер ни кәрәкмәй, беҙ үҙебеҙ ҡунаҡ итәбеҙ". Аптырайҙар. Күрше Әбделмәмбәт ауылында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы булды шул мәлдә. Ҡоҙағыйыбыҙ мәжлескә саҡырғайны, ҡунаҡтарыбыҙҙы шунда алып барҙыҡ. Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығына иҫтәре китте. Шулай ҡунаҡ булып, ер-һыу күреп, аптырап йөрөп ҡайттылар. Өйҙә бер йөк бысылған утын ята ине. Поляк ҡунағыбыҙ уй-байыбыҙға ҡуймай, шул утынды ярып бөттө. Бына шулай уйламаҫтан танышып, дуҫтар булып айырылыштыҡ.

**Зәкир.** Аҙаҡ уларҙан хат килде. "Рәсәйҙә башҡорт тигән үтә ҡунаҡсыл халыҡ бар икән, шуны ла белмәй йәшәгәнбеҙ. Бар булған таныш-белешкә һеҙҙең турала һөйләп иҫебеҙ китә", тип яҙғандар.

Элекке СССР, Рәсәй сиктәрендә күп йөрөһәк тә, сит илгә сыҡҡаныбыҙ юҡ ине. Испанияға сәфәр ҡылыуыбыҙҙың сәбәбе үҙенсәрәк килеп сыҡты. Зөһрә ҡыҙыбыҙ шул тарафтарға эшкә киткәйне. Шунда испан егетенә кейәүгә сыҡты. Мин башта ҡыҙыбыҙҙың сит ил кешеһенә кейәүгә сығыуына риза булманым. "Ҡабул итмәйем, кейәүҙе алып ҡайтып йөрөмә, үҙебеҙҙең мосолман булһа, бер асыу", тинем. Өфөлә йәшәгән икенсе ҡыҙыбыҙ шылтыратты: "Атай, Зөһрәгә көймә, кейәү бик һәйбәт кеше. Ул ислам динен ҡабул итте, мәсеттә никах уҡыттылар". Испан һынлы ерҙән Өфөгә килеп еткәстәре, ярай, килһендәр, тип, ризалаштым. Кейәү дуҫы менән беҙгә килде. Ысынлап та, бик һәйбәт кеше булып сыҡты, оҡшаны. Үҙ-ара аралашыуы ғына ауырырыраҡ булды, Зөһрәбеҙ ике арала тәржемәсе ролен үтәне. Шул килеүҙәрендә "көндәр бик эҫе булмаған сентябрь айында беҙгә килегеҙ", тип, ҡунаҡҡа саҡырып ҡайттылар. Үҙҙәре түләп, виза йүнләнеләр, юлға билет алдылар. Сит ил паспортын алып, документтарҙы теүәлләп бөткәс, әбей менән юлға сыҡтыҡ.

**Венера.** Өйҙә ултырғанда ғына ҡурҡыныс һымаҡ ул, юлға сығып китһәң, йүне табылып ҡына тора. Мәскәү аэропортына китеп барғанда бер егеттең телефондан башҡортса һөйләшкәненә иғтибар иттем. Етмәһә, беҙ барасаҡ Мадрид ҡалаһын да телгә ала. Эргәһенә барҙым да: "Һин, улым, ҡайҙа бараһың?" - тип һораштым. "Мин Америкаға осам", - ти. "Һин, инәй, үҙең ҡайһы яҡтыҡы?" - тип, егет тә ҡыҙыҡһынып китте. "Әбйәлилдәнмен", - тим. "Мин Баймаҡ районының Йомаш ауылынан..." Шулай танышып киттек. Аспирантура бөтөп, Америкаға китеп бара икән. "Минең самолет һеҙҙекенән алдараҡ оса, ваҡыт табып, таможня аша үтергә ярҙам итермен",- ти. Йән биргәнгә йүн бирә, тигәндәй, шулай яйы сығып тора ул.

**Зәкир.** Аэропорт, ысынлап та, бик ҙур, ауыҙ асып йөрөһәң, аҙашырға була. Таможняла энәһенән-епкә тиклем бик тәфсирләп тикшерәләр. Самолет Мадридҡа биш сәғәт оса. Шуныһы ҡыҙыҡ: сәғәт алмашыныу сәбәпле, Мәскәүҙән ун икелә осоп, тегендә лә шул уҡ ваҡытҡа барып төшәһең икән. " Мадридтың аэропорты Мәскәүҙекенән дә ҙурыраҡ. Сит ил, сит тел, кешеләргә эйәрмәһәң, башта баҙап ҡалаһың. Әммә унда аэропорт ҙур булһа ла, халыҡ аҙыраҡ. Мәскәүҙә бит шығырым тулы, хатта ултырыр урын да юҡ. Багажды алып, таможняны үтеүгә, балалар көтөп тора ине. Былай алдан да телефон аша хәлде белгертеп торҙоҡ инде. Аэропорттан сығыуға бер ҡосаҡ сәскә тотоп, кейәүебеҙ ҡаршы алды. Үҙ машиналарына ултыртып, Мадридтан өс йөҙ ҙә утыҙ саҡрымдағы ҡалаға алып киттеләр. Машина шәп, ә юлдары инде көҙгө һымаҡ тип-тигеҙ. Машина эсендә генә сайпылтмайынса сәй эсеп барырға була. Тағы шуныһы һәйбәт: беҙҙәге һымаҡ, ҡаршы килеүсе юл хәрәкәте юҡ, уртала бейек кенә бордюр - уңдан барғандар үҙ юлы менән, һулдағылар үҙ юлы менән бара. Тиҙлек сәғәтенә йөҙ утыҙ-йөҙ илле булһа ла, шәп барған һиҙелмәй ҙә. Тирә-яҡты күҙәтеп барабыҙ, бөтә ерҙә лә тәртип, гөл-баҡса. Буш ятҡан бер квадрат метр ҙа юҡ, бөтә майҙан эшкәртелгән, баҡса ултыртылған, сәселгән. Ҡырағай ағастар бик бейектәге тау баштарында ғына күренә. Күпселек майҙанды йыуан-йыуан зәйтүн ағастары биләй. Беҙҙең Ирәндектән бейегерәк тауҙарҙы тик шул ултыртылған ағастар ҡаплаған. Оло ағастарҙы ҡырҡып, урынына йәш үҫентеләр ултырта баралар икән. Улары ун йылдан емеш бирә башлай,тиҙәр. Беҙҙең баҙарҙа ниндәй емеш-еләк бар, шуларҙың барыһы ла ана шул ултыртылған урмандарҙа үҫә. Алма, әфлисун, мандарин, хөрмә емеше, кедр сәтләүеге, банан - бөтәһе лә бар. Йыл әйләнәһенә уңыш йыялар. Йорттар хатта тау башында ла күп. Юл шундай итеп һалынған, тигеҙ ерҙән барған һымаҡ булһа ла, тау башына менгәнеңде һиҙмәй ҙә ҡалаһың, үр бөтөнләй беленмәй. Ҡалаларҙа булғанда шуға иғтибар иттем: бөтә ерҙә таҙалыҡ, сүп-сар, бер тәмәке төпсөгө күрмәҫһең. Ҡатлы йорттарҙың һәр береһенең беренсе ҡатында кафе, ресторан, магазин, бөҙрәханалар урынлашҡан. Ашаған ваҡытта һыранан, ҡыҙыл шараптан өҙөлмәйҙәр, әммә урамда бер иҫерек тә юҡ. Киңлеге биш метрҙан артмаған тар ғына урамдар ҙа күп. Ундай урамдарҙа ла машиналар йыш йөрөй, тик уларҙа ла хәрәкәт бер яҡлы ғына.

**Венера.** Испаниялағы кешеләр оҙаҡ йәшәй икән. Ҡатындар ҙа, ирҙәр ҙә пенсияға алтмыш биш йәштән сыға. Итте әҙ ашайҙар, күпселек йәшелсә-емеш менән туҡланалар, төрлө һуттар эсәләр - был да оҙаҡ йәшәүгә йоғонто яһайҙыр инде. Былай ризыҡтары оҡшаны. Күберәген балыҡ менән туҡланалар. Төрлө ҙурлыҡтағы ҡабырсаҡ бешерәләр, уныһын беҙ ашаманыҡ. Тоҙланғандары ла бар. Уныһы ла күңелгә ятманы. Һарыҡ, һыйыр ите лә бешерәләр, ҡаҙ итен яраталар. Үҙебеҙҙән туҡмаслыҡ һалма ҡырҡып алып барғайным, башҡортсалап бишбармаҡ бешереп ашаттыҡ. Маз булдылар.

Кейәүҙең әсәһенә һикһән өс йәш. Биттә крем, оҙон итеп үҫтереп буялған тырнаҡтар, үҙе



*"Аҙна-ун көн ҡунаҡ булмайынса ҡайтмайһығыҙ", тибеҙ. Ире: "Юҡ, беҙ ун көндө нисек үткәрәбеҙ, ашарға ул хәтлем ҡайҙан табабыҙ?" - ти. Мин әйтәм: "Юҡ, һеҙҙән бер ни кәрәкмәй, беҙ үҙебеҙ ҡунаҡ итәбеҙ". Аптырайҙар. Күрше Әбделмәмбәт ауылында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" байрамы булды шул мәлдә. Ҡоҙағыйыбыҙ мәжлескә саҡырғайны, ҡунаҡтарыбыҙҙы шунда алып барҙыҡ. Башҡорттарҙың ҡунаҡсыллығына иҫтәре китте. Шулай ҡунаҡ булып, ер-һыу күреп, аптырап йөрөп ҡайттылар. Өйҙә бер йөк бысылған утын ята ине. Поляк ҡунағыбыҙ уй-байыбыҙға ҡуймай, шул утынды ярып бөттө. Бына шулай уйламаҫтан танышып, дуҫтар булып айырылыштыҡ.*

йәш ҡыҙҙар һымаҡ тысылдата баҫып йөрөй. Ағаһы ла ипле, тәртипле генә. Банкта эшләй икән. Апайының да, әсәһенең дә, оло булһа ла, үҙ магазиндары бар. Шулай етеш, һәйбәт йәшәйҙәр. "Ҡыҙығыҙ өсөн ҡайғырмағыҙ, беҙ уны ярата-быҙ", тиҙәр.

**Зәкир.** Улар беҙҙәге һымаҡ умыра тешләп икмәк, һалма ашап ултырмайҙар, күберәк тәмле-татлы менән туҡланалар. Икмәкте йоҡа ғына итеп ҡырҡалар ҙа, шуның өҫтөнә йә сыр, йә колбаса, йә ит, йә балыҡ ыуылдырығын һалалар, йә майонез һылайҙар. Беҙҙәге һымаҡ бутҡа-мутҡа ашамайҙар, ризыҡтарының күпселеге шәрбәт. Сәй, ҡәһүә, һут эсәләр. Аш һайын һыра, шарап ултырталар, араҡы юҡ. Беҙҙәге бал ҡорто менән ҡыҙыҡһыналар, бал яраталар. Ҡүстәнәскә алып барған балға иҫтәре китте. Ҡыҙыбыҙ үҙебеҙсәләп аш бешерһә, яратып ашайҙар. Бер көн, деликатес, тип тырнаҡ ҙурлыҡ ҡына ҡабырсаҡтарҙы ҡутарғансы бешереп алып килеп ултырттылар. Минең ашағым килмәй. Кейәү: "Мин һеҙҙә нимә ултыртһағыҙ ҙа ашаным бит. Беҙ ат ите ашамайбыҙ, ә һеҙ ашаттығыҙ, тәмле ине", - тип көлә. Бер-икәүһен алып ҡаптым да, барманы, күңел тартмай.

Былай үҙҙәре ресторанда ашап өйрәнгәндәр. Аҙыҡ-түлек магазиндарында ярымфабрикат аҙыҡ күп һатыла. Бөтәһе лә әҙер, йылыт та аша.

Беҙ барыуға кейәү ҡайҙа алып барырға икәнде алдан билдәләп, план төҙөп ҡуйған. Иртәнсәк тороп тамаҡ ашайбыҙ ҙа, шул маршрут буйынса сығып китәбеҙ. Быларҙың тау башында ике ҡатлы, ете-һигеҙ бүлмәле дачаһы бар икән. Ике көн шунда ҡунаҡ иттеләр. Аҙаҡ диңгеҙ буйындағы дачаларында дүрт көн булдыҡ. Шуныһы һәйбәт: дачаларындағы һәр бүлмәгә айырым бәҙрәф, ванна эшләнгән, беҙҙәге һымаҡ күмәк кешегә уртаҡ түгел. Ашарға ваҡыт еткәндә генә дөйөм кухняға йыйылалар. Диңгеҙ һыуы шул тиклем таҙа, үтәнән-үтә күренә. Дачалары һаҡһыҙ-ниһеҙ шул көйөнсә тора. Унда урлашыу тигән нәмә бөтөнләй юҡ, тиҙәр. Әйткәндәй, беҙгә килгәндә кейәүгә мунса оҡшап ҡалған. Хәҙер үҙҙәрендә лә беҙҙәгенә оҡшатып мунса төҙөттөрөргә уйлап йөрөй икән. Шулай кейәүҙең планы буйынса ете-һигеҙ ҡалала булдыҡ, машина менән үҙе алып йөрөтөп күрһәтте.

Бер көндө йәшәгән урындан өс йөҙ саҡрымдағы бер мәмерйәгә алып барҙылар. Бик ҙур, тәрән мәмерйәгә яҡтылыҡ үткәргәндәр. Баҫҡыстар буйлап йөрөп ҡарап сығырға була. Ул сталактит, сталагмит тигән нәмәләре юнып-йышып эшләнгән бағаналар кеүек аҫылынып тора. Мәмерйәне бынан илле йылдар самаһы элек кенә тапҡандар ҙа, туристарҙы ҡыҙыҡһындырыу өсөн бик ҡулай файҙаланалар. Бөтә ерҙә таҙалыҡ, тәртип. Ашап-эсер, ял итер өсөн махсус урындар бар.

Марокко халҡының мәсетенә инеп, намаҙ уҡып сыҡтыҡ. Бик боронғо мәсет икән. Уны мең дә ике йөҙөнсө йылда уҡ ғәрәптәр төҙөгән. Аҙан ҡысҡырыу менән бар мосолмандар Алла йортона ашыға. Унда мәсеткә ҡара халыҡ күберәк йөрөй. Намаҙҙары беҙҙәгенән бер аҙ айырыла. Беҙҙә йома намаҙын ун рәкәғәт уҡыһалар, унда ике рәкәғәт кенә уҡыйҙар. Муллалары башта сәғәттән ашыу вәғәз һөйләй. Ике рәкәғәттән һуң тағы ярты сәғәттәй вәғәз һөйләй ҙә, намаҙҙары тамам.

Уларҙың ҡатындары сәс үреп, бөҙрәләтеп, прическа яһап йөрөмәй, бөтәһе лә бер иш итеп сәстәрен артҡа тарап, бәйләп ҡуялар. Уларҙа ни, бер күлдәк тә, бер салбар. Шулай кейенеп алып, яланбаш тик йөрөйҙәр. Беҙҙәге кеүек йәйен бер кейем, ҡышын бер кейем йүнләү юҡ. Осло дағалы аяҡ кейеме бөтөнләй күренмәй.

**Венера.** Зөһрә ҡыҙыбыҙ минә яулыҡ ябындырмай йәлатты. "Бында бер кем дә башына ябынмай, ойоҡ кеймәй", - ти. Ҡайҙан инде, өйрәнгән нәмәне ташлап булмай. Бактиһән, бында шулай кейенгән ғәрәптәрҙе яратып етмәйҙәр икән. Уларҙы террористар кеүек күрәләр. Минә лә урамда тексәйеп-тексәйеп ҡарап ҡуя инеләр. Ундағы әбейбабайҙар йәштәрсәрәк бик ыҡсым кейенеп йөрөргә ярата. Ололар күберәген биш-алты кеше йыйылып, күләгәлә ашап-эсеп, һөйләшеп ултыра.

**Зәкир.** Беҙҙәге кеүек, тирләп-бешеп эш менән булып йөрөгән кеше күренмәне, бөтәһе лә, нисектер, ял итә кеүек. Унда электр энергияһын да елдән алалар. Ҡайҙа ҡарама, өс лопаслы өрәлткөстәр күрергә була. Ҡояштан энергия алыусы батареялар ҙа күп. Төрлө маркалағы машиналарҙың иҫәбе-һаны юҡ, әммә тығын тигән нәмә бөтөнләй юҡ, сөнки һәр ике рәттәге хәрәкәт иткән техникаларҙың юлы киҫешмәй. Һыҙырылған, бууылы ҡупкан машиналар бөтөнләй осрамай, бөтәһе лә өр-яңы.

**Венера.** Телевизорҙан яңылыҡтарҙы ҡарап-ҡарап алдыҡ. Ҡыҙыбыҙ интернет аша бөтөн Рәсәй тапшырыуҙарын ҡарай, "Юлдаш" радиоһын да тыңлай. Лужковты отставкаға ебәреүҙәрен беҙ алдараҡ ишеткәнбеҙҙәр әле. Кейәү спутник бәйләнеше аша беҙҙең ауылдағы өйҙә эҙәлп таптан. "Бына өйөгөҙ, арттағы баҡсала өс кәбән бесәнегеҙ ултыра", - тип күрһәтте.

**Зәкир.** Испанияның үҙендә ситтән килгән халыҡ күп. Мәҫәлән, Әбйәлил районынан ғына унда ҡыҙыбыҙ белгән биш ҡатын эшләй икән. Берберећен беләләр, осрашып торалар. Зөһрәбеҙҙең йыраҡта булыуына башта борсола инек. Әле бер аҙ тынысланып ҡайттыҡ. Киләһе йыл улар кейәү менән ҡунаҡҡа киләбеҙ тип ҡалдылар. Ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарҙың да беҙгә килеп ҡайтырға уйы бар. Кейәү менән ҡыҙыбыҙ Өфөнән өй һатып алырға уйлайҙар. Йәй бында йәшәп, ҡыш Испанияла йәшәргә, тип план ҡоралар.

Тағы шуныһы тынысландыра: унда ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәт бөтөнләй икенсе төрлө. Беҙҙәге тормош үҙе ҡайсаҡ ир менән ҡатынды үҙ-ара ыҙғышҡа этәрә. Ундағы етеш тормош мөнәсәбәттәрҙе башҡаса көйләгән.

**Венера.** Ҡайтырға сыҡтыҡ. Балалар оҙатып ҡалды. Уларҙы таможнянан ары үткәрмәнеләр. Ә аэропорт шул тиклем ҙур. Телде белмәгәс, һә тигәнсе аҙашырға була. Башта ҡаушап ҡалдыҡ. Шунда бер мәрйә минә атлай алмаған булып ҡылан, тип, аҡыл өйрәтте. Баҡтиһән, аяғы зәғифтәрҙе махсус коляска менән этеп алып йөрөйҙәр икән. Шулай итеп, мине кресло һымаҡ нәмәгә ултыртып, этеп алып киттеләр. Бабай арттан эйәрә. Инде көлөп кенә ебәрмәйем, тип, саҡ тыйылып киләм. Шул коляска менән лифтҡа ултыртып, аҫҡа алып төшөп киттеләр, кире мендерҙеләр, ҡайҙа кәрәк, шунда алып йөрөнөләр. Самолетҡа тиклем шулай оҙатып ҡуйҙылар. Ҡарап торам, бер ҡатынды ла этеп алып килделәр. Күренеп тора, был да минең кеүек хәйлә ҡорған. Телде белмәһәң дә, шулай бер йүне килеп сығып тора бит ул, сослоҡ кәрәк.

**Зәкир.** Шулай ҙа, унда ни саҡлы ғына һәйбәт булмаһын, тыуған илгә етмәй. Мәскәүгә килеп төшкәс тә үҙебеҙҙең яҡта икәнде тояһың, күңел тынысланып ҡала. Ҡайҙа йөрөһәң дә тыуған яҡ тартып тора бит ул.

**Венера.** Ошонан имен ҡайтһам, ҡабат сит илгә аяҡ баҫмайым, тип, юл буйына уйлап йөрөнөм, сөнки, ни тиһәң дә, йәш саҡ түгел бит. Сентябрҙең ун һигеҙе Мәскәүҙән осҡайныҡ, утыҙы Мадридтан кире ҡайтырға самолетҡа ултырҙыҡ. Бер әкиәт, төш һымаҡ ҡына булып иҫтә ҡалды.

Радик ӨМӨТҠУЖИН
яҙып алды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Киске Өфө"нөң ҡатнаш никахтарҙы хупламағанын белә гәзит уҡыусылар. Был мәҡәләне яҙыуҙың маҡсаты ла сит ил кейәүҙәрен маҡтау түгел. Ауыл ерендә йәшәгән, 70 йәште ваҡлаған өлкән кешеләрҙең, донъяһына сат йәбешеп ятмай, сит ил ҡыҙырырға батырсылыҡ итеүе, ситтәр араһында халҡыбыҙҙың күркәм сифаттарын, ҡунаҡсыллығын күрһәтә алыуы, унда күргәндәр ни тиклем яҡшы булмаһын, үҙ көнитмешенә тел тейҙермәүе, үҙ-үҙенә тоғролого ҡыҙыҡ тойолдо беҙгә. Ниғмәтуллиндар, әлбиттә, ҡыҙҙарының ситтә йәшәүенә, сит милләт егетен иш итеүенә көйөнә. Башҡа балаларының үҙ тыуған ерендә йәшәүенә, үҙ милләтенә балалар үҫтереүенә ҡыуана. Ни эшләмәк кәрәк, ҡайны саҡта сит тарафтарға ла илтеп тә ҡуя шул яҙмыш елдәре балаларыбыҙҙы. Ул хәл йыш була күрмәһен, сит-ят ерҙәрҙә, сит милләттә дуҫтар булһын, ейәнейәнсәрҙәр булмаһын...**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# АҠСАЛА ҒЫНАМЫ БӘХЕТ...

## әллә башҡаламы?

**Беҙ, "бөйөк үҙгәртеп ҡороуҙар" осорҙарынан саҡ ҡына алдараҡ донъяға килгән XX быуат йәштәре, аҙмы-күпме коммунизм-ленинизм ҡанаты аҫтында йәшәп, уның берҙәм ҡанундары алдында тоғролоҡҡа анттар биреп, муйындарға ҡыҙыл галстуктар тағып, барабандар ҡағып, борғолар ҡысҡыртып, яҡты коммунизм киләсәгенә маҡсаттар билдәләгән бер быуын инек. Сер түгел, ул саҡтарҙа йәмғиәттә тәртип, әхлаҡ, яуаплылыҡ тигән сифаттар барыбер ҙә булды. Хәҙер инде шул замандарға боролоп бер ҡарайым да, аптырап ҡуям. Уҙа барһа, сама менән егерме йыллап ваҡыт үткәндер беҙ ир еткәнгә, ә ни тиклем үҙгәреш!**

1990-1991 йылдар. Әле мәктәптә белем алып йөрөгән генә саҡтарым. Уҡытыусыбыҙ "Ҙурайгас, кем булырға теләйем?" тигән популяр темаға инша яҙҙыртты. Ул ваҡыттарҙа, билдәле инде, беҙҙең ишеләрҙең төп идеалдары булып Гагариндай космонавтар, Гәрәевтәй летчиктар, Матросовтай геройҙар торҙо. Киләсәгемдең нигеҙ һалыусыһы тик үҙем генә, тигәнде иҫтә тотоп, мин дә инша ишараты яҙған булдым. Бөгөнгөләй хәтеремдә: "Ҙурайгас, аҡсалы ҙур бер начальник, йә банкир булғым килә", тип яҙған иншамды класс алдында ҡысҡырып уҡып ишеттереүем һәм барыһы алдында ла көтөлмәгән оятҡа ҡалыуым. "Һинең өсөн аҡса тәүмаҡсатмы ни?" тип көлгәйнеләр минән ул саҡта. Бик уңайһыҙ булды, әлбиттә. Ул замандарҙа беҙҙең йәмғиәт өсөн аҡса төшөнсәһе төп идеал булып тормай ине әле. Тыуған илгә лайыҡлы хеҙмәт, патриотлыҡ тойғоһо, граждандыҡ хоҡуҡтары, бер- беренә ярҙамсыллыҡ сифаттары тәрбиәләү шарттары хөкөм һөргән ваҡыттар. "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын" мәҡәленең дә иң актуаль саҡтары...

Ә хәҙер барыһы ла баштүбәнгә әйләнде. Аҡса иң алдан йөрөй, бар нәмәне лә фәҡәт ул ғына хәл итә. "Аҡса - командир, аҡса - генерал! Әгәр аҡса кәрәкмәһә, мин дә һеҙҙең алдығыҙҙа баҫып тормаҫ инем", тигәйне бер бик билдәле артист үҙ сығышында. Эйе, аҡсаң булмаһа, һин кеше түгел бөгөн. Эштең аҡсалыһын эҙләп ҡайҙарға ғына китмәйҙәр! Ул Мәскәү, Себер, Италия, Испания тиһеңме. "Аҡса эшләү принцибы" хәрби оборонаға ла үтеп инде. "Бер-нисә йылға ғына контракт төҙө - күп итеп аҡса түләйбеҙ!", йә булмаһа: "Грецияға барып, ҡарттар тәрбиәләп яттым әле ике йыл буйы һәм "йышып-йышып" аҡса эшләп ҡайттым. Эйе! Алла бирһә, быйыл йәй ҡыҙымды ла үҙем менән алып китәм", йәки: "Кейәүебеҙ бер мәшәү генә әҙәм инде, ҡыҙыбыҙ уны быҙауға ла тиңләмәй. Әммә үҙе, ай-һай, аҡсалы. Нефтеюганскиҙа эшләй - газ үткәрә. Вахтанан ҡайтҡан һайын тоҡлап аҡса алып ҡайта. Әле икеһенә лә иномарка алып менделәр, хәҙер малайҙарына "Нексия" алып бирмәкселәр". Шуның һымаҡ һөйләшеүҙәр ҡолаҡҡа инә тора. Эйе, аҡса барыбыҙ өсөн дә ысын мәғәнәһендә бер идолға әйләнде. Теге ваҡыттарҙа минән ғәм халыҡ алдында көлгәндәрҙең дә был фани донъяға ҡарашы үҙгәрҙе. Бына хәҙер уларға аҡсаның тәүмаҡсат түгеллеген иҫбатлап маташҡан бул, улар мотлаҡ һинә бер тилегә ҡараған кеүек ҡараясаҡ. Иманым камил. Бына шуға ауаздаш йәнә бер миҫал. Эш буйынса баш ҡалала йөрөгән бер сағымда күптән күрешмәгән танышымды осраттым. Элек институтта бер курста уҡығайныҡ. Һөйләшеп киттек. Өфөнөң бер шәхси предприятиеһында менеджер булып "тир түгә" икән. Һөйләүенә ҡарағанда, килеме лә бик мул ғына. Тик нинәлер танышым ай һайын килеп торған утыҙ мендең дә үҙен ҡәнәғәтләндермәүенә ҡырҡ ҡат баҫым яһап, ҡарғанып, тиргәнеп тигәндәй, зарланыуын ғына белде. Минең ябай бер мәктәптә ябай педагог булып, айына бисмилла итерлек алты-меңде алып йөрөүемде ишеткәс, башта туйғансы рәхәтләнеп көлөп алды һәм минә тиләләр йортона юлыҡмаҫ элек, кеше-маҙар алдында "оятҡа ҡалмаҫ борон" тиҙерәк был эшемдән тайырға тәҡдим итте. "Биш йыл буйы институтта беҙ ошонаң өсөн мейе серетткеме ни?" тигән фекеремә ҡулын ғына һелтәне. Инде, минең үҙ позициямда нығ торасағымды аңлағас, "Донъянан бик артта ҡалғанһың - лечись!" тип әрләп, бөтөнләй китеп барҙы.

"Бар ярашты ра, юҡ талаштыра" тигән бик тә аҡыллы әйтем йәшәй халҡым телендә. Кешеләрҙең, хатта яҡын туғандарҙың һуҡыр тинлек атай малы өсөн генә лә бер-берећен һуйып үлтергән; эш хаҡы ваҡытында түләнмәгәнгә бәхәстәрҙән суд файҙаһына тамамланған; кемдәрҙеңдер гәзиз баштары бер бәхетһеҙ ришүәт ишараты өсөн төрмәгә эләккән осраҡтарҙы ишетеп-күреп беләбеҙ һәм былар бер кемде лә ғәжәпләндермәй.

**Ҡыҫҡаһы, уйлашыр, бәхәсләшер өсөн сәбәптәр етерлек бында. Тик шуныһы аңлашылмай: ысын бәхет аҡсала ғынамы икән?.. Гәзит уҡыусылар был хаҡта ни уйлай?**

С. ДӘҮЛӘТОВ.
Баймаҡ районы.

**✓ Тәфтизән был юлы ефрейторҙың суҡмарҙай йоҙроғо үҙенә килеп ҡунырын көтөп торманы, уның айыуҙай дәү кәүҙәһенә лә ҡарап тормаҫтан, ятҡан ерәнән бар көсө менән Задконың битенә типте.**




Отбой алдынан һалдаттар, айырыуса йәштәр, Ленин бүлмәһенә инеп, тыуған иленә хат яҙыусан. СССР ваҡытынан алып ул бүлмәне һалдаттар әле булһа ла шулай тип атап йөрөтә. Тәфтизән дә бөгөн ҡағыҙ, конверт алып, шул бүлмәгә инде. Унда бер рус егете һәм Илһам хаттарын яҙа ла башлаған. Илһамдың йөҙө бойоҡ, күҙҙәренә бер аҙ йәш алған кеүек...

- Һинә ни булды, Илһам, нинә былай бик кәйефһеҙ күренәһең? - тип һораны ингәс тә Тәфтизән яҡташынан.

- Ә-ә-ә, бүстәк, - тигән булды тегеһе, бер аҙ йылмайырға ла маташҡандай итте. Яҡташы уҡып ҡуймаһын, тигәндәй, яҙа башлаған хатын ҡулы менән ҡаплай бирҙе.

- Йөҙөңә ҡарағанда бүстәк һымаҡ күренмәй эштәрең. Балтаң һыуға төшкән бит...

- Айназа исемле бер ҡыҙ "көтөрмөн" тип оҙатып ҡалғайны, - тип бер аҙ тартына бирерәк башланы Илһам, кеҫәһенән йылмайып ултырған сибәр ҡыҙҙың фотоһүрәтен сығарып күрһәтте. - Килгәне бирле ҡош телендәй ҙә хәбәр алғаным юҡ. Үҙем әллә күпме яҙһам да...

- Ныҡ яратаһыңмы ни уны?

- Эйе... - Егеттең сикәләре буйлап ике йәш бөртөгө тәгәрәне.

- Китсәле, бушҡа шыңшып ултыраһың ҡыҙҙар ҡошап. Тапҡанһың ҡайғырыр нәмә... "Бабайҙар" менән мөнәсәбәт нисек әле һинең?

- Бик шәптән түгел, - Илһам уң ҡулының һырты менән күҙҙәрен һөрттө лә дауам итте, - кисә генә дневальный булып нарядта торғаным етмәгән, бөгөн береһенең урынына тағын да төнөн "тумбочка"ға ҡуймаҡсы итәләр. Кесе сержант Сидоров килеп әйтеп китте...

- Бөгөн төндә һин тормаясаҡһың! - тине Тәфтизән асыулы итеп. - Нимә, ауыҙ асып һүҙ әйтергә эшкинмәйһегеҙ берегеҙ ҙә? - Ул бар йәш һалдаттарға өндәшкәндәй итте. - Һин бит руссаға минән шәберәкһең, минең кеүек ауылдан түгелһең. Хәҙер Сидоров менән үҙем һөйләшәм...

Тәфтизән хат яҙырға тип әҙерләгән аҡ ҡағыҙын йомарлап, кеҫәһенә тыҡты ла сығып китте.

- Иптәш, кесе сержант, - тине ул карауаты янындағы ултырғыста кителенә аҡ яға тегеп ултырған Сидоровҡа мөмкин тиклем уставса өндәшергә тырышып. - Белеп ҡуй: рядовой Йосопов бөгөн төндә нарядҡа тормаясаҡ!

- Кем әйтте? - тегеһе ҡапыл да бер ни ҙә аңламаны.

- Мин әйттем.

- Һин - кем?

- Кеше! - тине лә Тәфтизән китергә йыйынды. - Рядовой Йосопов та - кеше! - тип өҫтәне.

- Туҡта әле, кем, Абдулов, - тип Сидоров ултырған ерәнән һикереп тороп уны туҡтатты. Бер аҙ йыуашайып ҡалғандай булды. - "Бабай"ға нимә тип әйтермен мин? Миңә бит унан эләгәсәк...

- Нимә тип әйтһәң дә - әйтерһең...

...Отбой алдынан төнгөләккә Сидоров, ысынлап та, икенсе бер йәш һалдатты дежурға ҡуйғайны. Сәғәт киске ун беренсе ярты тулғас, барыһы ла йоҡларға ятты. Казармала рота буйынса дежурныйҙан башҡа начальниктар ҡалманы. Тәфтизән йоҡлап китә алманы. Аҫҡы яруста ятҡан Ярошенко уға, моғайын, тигенгә генә янамағандыр. Илһамды яҡлашҡаны өсөн дә ҡонон ҡайтарырға маташыуҙары мөмкин. Әммә был тынлыҡ оҙаҡ ыҙалатманы, көтмәгәндә дежурныйҙың "Рота, подъем!" тигән әсе тауышы яңғыраны. Барыһы ла урындарынан һикереп тороп, кейенешә башланы. "Ике рәткә теҙелергә!" Икенсе команда бирелде.

Бер-ике минуттан бөтә рота казарманың оҙон коридорында ике рәт булып теҙелеп тора ине. Саф алдында бер нисә сержант һәм дәү ефрейтор Задко. Ефрейтор ғына булыуына ҡарамаҫтан, араларында ул баш икәнен аңлау ҡыйын түгел. Ҡулдарын артҡа ҡаушырып, унда-бында йөрөүенә һәм сержанттарҙың уға ярамһаҡланып юл биреп тороуына ҡарағанда, ниндәйҙер ҙур бер начальник тиерһең...

- Минең команданы тыңлағыҙ, - тип командир тауышы менән бойороҡ бирә башланы Задко. - Икенсе йыл хеҙмәт иткән һалдаттарға өс аҙым алға!

Бер йылдан ашыуыраҡ хеҙмәт иткәндәр барыһы ла ауыр итектәре менән гөрһөлдәтә баҫып команданы үтәне. Оҙаҡламай икенсе команда яңғыраны:

- Икенсе йыл хеҙмәт иткәндәргә - таралырға, отбой!

Алға сыҡҡан һалдаттар командаға буйһоноп, һәр береһе үҙ урынына таралыша башланы. Сафта тик әле килгән йәш һалдаттар һәм ярты йыл хеҙмәт иткәндәр генә тороп ҡалды. Саманан тыш эре күренгән тештәрен ауыҙ тултырып уҫал йылмайып, ефрейтор тамаҡ төбө менән һөрәнләп өсөнсө бойороғон бирҙе:

- Рядовой Абдулов!

- Мин!

- Стройҙан сығырға!

- Есть! - тип яуапланы һалдат устав буйынса һәм аяҡтарын юғары күтәреп, төп-төҙ баҫып, өс аҙым алға сыҡты ла сафҡа ҡарай йөҙө менән әйләнеп торҙо. Артабан ни булырын көтөп, барыһы ла тынып ҡалды. Задко оҙаҡ көттөрмәне, ҡулдарын артҡа ҡаушырып тотҡан килеш һуғыш тураһындағы кинофильмдарҙағы яугир командирҙы хәтерләтеп, етди, асыулы йөҙ менән үҙенең телмәрен башланы:

- Тыңлағыҙ, улҡайҙарым, беләһегеҙме ни өсөн беҙ һеҙҙе ошо төн уртаһында татлы йоҡоғоҙҙан уятырға мәжбүрбеҙ? Беләһегеҙме, кемдең арҡаһында? Бына ошо һеҙҙең алда торған Абдулов арҡаһында, - ул бармағы менән Тәфтизәнгә төртөп күрһәтте. - Ул үҙенең кирелегенә һалыныш, йылдар буйы армияла һаҡланып килгән изге гөрөф-ғәҙәтте боҙорға, һалдат хеҙмәтенең тотҡаһы тип әйтерлек булған төп традицияны үтәмәскә маташыуы менән беҙҙең - "бабайҙар"ҙың асыуына тейҙе һәм үҙ- үҙенә хөкөм ҡағыҙына ҡул ҡуйҙы. Беҙ уны "ҡара исемлек"кә индерҙек. Бынан ары ул беҙҙең мәрхәмәткә өмөт итә алмаясаҡ. Ул ғына ла түгел, уның өсөн һеҙ ҙә ыҙа сигәсәкһегеҙ. Хәҙер барығыҙ ҙа иҙәнгә ятып, ҡулдарығыҙ менән бишәр йөҙ мәртәбә ҡалҡынмайынса, отбой тураһында хатта уйламағыҙ ҙа. Аңланығыҙмы? Ә Абдулов һеҙҙең нисек михнәтләнгәнегеҙҙе ҡарап торасаҡ... Аңланығыҙмы, салагалар?

Сержанттар араһында меҫкен генә күренеп торған Сидоровҡа боролоп, ефрейтор киләһе командаһын бирҙе:

- Иптәш кесе сержант, - тине мөмкин тиклем уставсараҡ мөрәжәғәт итергә тырышып, - күнегеү дәресен алып барыу һеҙгә йөкмәтелә...

Үҙенең ораторлыҡ һәләтенә ҡәнәғәт булған Задко башҡа сержанттарға ҡараны. Тегеләре, уны ҡеүәтләгәндәй, хахылдашып көлөшөп алды. Кесе сержант Сидоров ефрейторҙың бойороғон үтәп, тейешле бойороҡтарын бирә лә башланы.

Тамашаны ҡарап күнел асырға йыйынған "карттар" көтөлмәгән күренештән албырғап ҡалды: йәш һалдаттарҙың нисек ыҙа сиккәнен ҡарап торорға тейеш булған Абдулов, бер ни ҙә булмағандай, ҡыйыу аҙымдар менән карауаты яғына табан йүнәлде.

Башта ефрейтор Задко телгә килде:

- Һин ҡайҙа киттең, эй! А ну, туҡта!

Ләкин егет бер ни ҙә булмағандай, карауаты янына килде һәм тиҙ генә сисенә һалып, урынына менеп ятты.

- Мин йоҡлайым, - тине ул тыныс ҡына булырға тырышып. Тик тыныс булыу ҡайҙа инде ул! Асыуҙан һәм тулҡынланыуҙан уның йөрәге күкрәк ситлеген ярып сығырҙай булып дарһылдап тибә ине. Хәҙер уның менән ни эшләйәсәктәре көн кеүек асыҡ. Шуға күрә лә эстән генә бар көсөн йыйып, һуғышырға әҙерләнде. Тегеләр оҙаҡ көттөрмәне. Үҙен башҡалар алдында унайһыҙ хәлдә ҡалдырған салағаны һис шикһеҙ аҡылға ултыртырға тигән теләк менән янған Задко уның карауаты янына килеп, кинәт кенә одеялын иҙәнгә тартып төшөрҙө. Ләкин Тәфтизән был юлы ефрейторҙың суҡмарҙай йоҙроғо үҙенә килеп ҡунырын көтөп торманы, уның айыуҙай дәү кәүҙәһенә лә ҡарап тормаҫтан, унайын табып, ятҡан ерәнән бар көсө менән Задконың битенә типте. Аяғы танауына тура килде, ахрыһы, һөйәк һынып шытырҙаған тауыш сыҡты. Айыу ике ҡуллап битен тотоп ергә сүкте. Морононан сорлап ҡан китте... Күҙ асып йомғансы булған ошо хәл - йәш һалдаттың көтөлмәгән был ҡыланышы оло һалдаттарҙы тетрәндерҙе. Улар тәүҙә, ни эшләргә лә белмәйерәк, бер аҙ ҡаушап та ҡалған һымаҡ булды. Унан икеһе, иҙәндә сүкәйеп танауын тотоп ултырған Задконың битен таҫтамал менән ҡаплап, етәкләп йыуыныу бүлмәһенә алып инеп китте. Ҡалған өсәү-дүртәүһе йыртҡыстай ташланырға Тәфтизәнгә яҡынлаша башлағанда ғына казарма ишеге яғынан "Отставить!" тигән көслө ҡалын тауыш ҡолаҡты тондорҙо. Казармалағы ошо ығы-зығы хәл тураһында ниндәйҙер бер аңлырағы беренсе ҡатта урынлашҡан поска йәшерен генә хәбәр иткән, буғай, ваҡытында килеп еткән офицер - часть буйынса дежурный майор ине. Ҡарттар йәшен тиҙлеге менән үҙ урындарына таралышып, сисенмәгән көйө карауаттарына сумды. Трусик һәм итектән генә ҡалған йәш һалдат кесе сержант Сидоров менән аптыранып казарма коридоры уртаһында тора бирҙе.

- Иптәш кесе сержант, нимә булды? Ни өсөн ете төн уртаһында личный состав йоҡламай? Яуап бирегеҙ, иптәш кесе сержант!

Башын аҫҡа эйгән меҫкен Сидоров ни тип әйтергә лә белмәне.

- Ҡайҙа рота буйынса дежурный?

- Ул ауырып китте, иптәш майор. Урынына ваҡытлыса - мин... - Үҙенең урынына төнгөләккә дежурҙа торорға ҡушҡан өлкән сержантты Сидоров һатманы. Һуңынан өлкән сержант алдында яуап биреүе күпкә ауырыраҡ булырын белә ул.

- Ауырыһа - санчаҫҡа барһын! - тигән булһа ла, күпте күргән майор оло сержанттың йәш сержантты үҙ эшен эшләргә мәжбүр иткәнен бик яҡшы белә ине. Ләкин башҡаса һүҙ ҡуйыртып торманы:

- Отбой! - тип яңынан команда бирҙе лә өҫтәп ҡуйҙы: - Бер минуттан казармала дежурныйҙан башҡа йоҡламаған берәү ҙә ҡалмаһын. Юғиһә, иртәгә ярты казарма гауптвахтаға китәсәк! Ә һеҙ, иптәш кесе сержант, таңға тиклем миңә ни өсөн һалдаттарҙы быҡаса йоҡлатмай тотҡанығыҙ тураһында "Аңлатма" әҙерләгеҙ...

Сидоровтың хәле шәптән түгел ине. Сүкеш менән түш араһында ҡалған һымаҡ тойҙо үҙен. Әлбиттә, бөтә ғәйепте үҙ өҫтөнә аласаҡ ул. Күп булһа, биш-алты тәүлеккә гауптвахтаға ултыртырҙар. Бите ҡанға буялған, танауы ныҡ ҡына ҡыйшайған ефрейтор Задконы майорҙан йәшереп алып ҡалыуға ирешә алдылар. Дежурный йыуыныу бүлмәһенә инмәне...

"Бәләһенән баш-аяҡ", тип, таңға тиклем уяу ятырға тырышҡан Тәфтизәнде, ғәжәпкә ҡаршы, башҡаса борсоусы булманы. Шулай ҙа таң алдынан үҙе лә һиҙмәҫтән ойоп китте...

Төш мәлендә бөтә часты плацҡа теҙеп ҡуйҙылар һәм полк командиры кесе сержант Сидоровты саф алдына сығарып, "Йәш һалдаттарҙы ҡыйырһытҡан өсөн" уға биш тәүлек гауптвахта иғлан итте һәм ҡулына ҡайсы тоттороп, погондарындағы сержант таҫмаларын киҫеп ташларға бойорҙо. Шулай итеп, йәш кесе сержант яңынан рядовойға әйләнде.

Иртәнге күнегеүҙәр мәлендә лә, плацта ла ефрейтор Задко күренмәне. Танауы һыныу арҡаһында госпиталгә һалғандар, тинеләр һуңынан. Ул госпиталгә эләккәс, Тәфтизән бер аҙ шөрләп тә йөрөнө. Уның ғәйебен белеп ҡалһалар, трибунал судына ла тарттырыуҙары мөмкин. Әммә, әллә ғәрләгәнән, әллә ниндәй сәбәп менәндер, Задко табиптарға ла, командованиеға ла "йыуыныу бүлмәһендә янылыш тайып йығылып, танау менән бәрелдем", тип алданы...

Шул хәлдән һуң бер айҙай ваҡыт үтте. Отбойҙан һуң "карттар"ҙың көн дә тиерлек күнел асыуҙары туҡталып ҡалды. "Рядовой Абдулов арҡаһында ошо хәлгә тарыныҡ", тип, йәш һалдаттарҙың нәфрәте уяныр, тигән өмөт менән Тәфтизәнгә ҡаршы ҡоролған мәкерле пландары тормошҡа ашманы. Ләкин һалдат тормошо ниндәйҙер берәй мажараһыҙ оҙаҡ дауам итмәйҙер, күрәһең. Бер көн, төшкә ашҡа килгән һалдаттар ашханаға ингәс, көндә-

ИНТЕРНЕТТАН



# ҮҘЕҢДЕҢ БАҺАҢДЫ БЕЛ...

## йөрәгең ныҡ булыр

■ Донъяла кәрәҙле телефондарҙан секундына яҡынса 200 мең смс ебәрелә, тип белдерә Халыҡ-ара электр бәйләнеше берләшмәһе. Белгестәр әйтеүенсә, һуңғы өс йыл эсендә смс-тар һаны өс тапҡырға артҡан. Әгәр ҙә 2007 йылда кеҫә телефондары менән ҡулланыусылар аралашыуҙың бындай исулына 1,8 триллион тапҡыр мөрәжәғәт итһә, 2010 йылда был һан 6,1 триллионға еткән. Документтарға ярашлы, донъя буйынса бер смс-тың уртаса хаҡы 0,7 доллар һәм смс-тар арҡамында ғына кәрәҙле бәйләнеш компаниялары секундына 14 мең йәки минутына 812 мең доллар аҡса эшләй. Иң күп смс яҙыусылар - Филиппин һәм АҠШ-та йәшәүселәр. 2010 йылдың һөҙөмтәләре буйынса кәрәҙле бәйләнеш менән ҡулланыусы абоненттар иҫәбе 5,3 миллиардҡа етәсәк, тип фаразлай бәйләнеш берләшмәһе. Рәсәйҙә 2009 йылда кеҫә телефоны менән 230 миллион кеше ҡулланған һәм уртаса һәр ике рәсәйлегә 3 кеҫә телефоны тура килгән.

■ Bayer Schering Pharma фармацевтик компанияһы мөһим булған һөйләшеүҙәрҙе тәүлектең ҡайһы ваҡытында башлау яҡшыраҡ булыуын асыҡлау өсөн һорау алыу үткәргән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, әгәр ҙә ҡатын-ҡыҙ иренән үҙенә кәрәк әйберҙе сәғәт киске алтыла һораһа, маҡсатына ирешәсәк. Ир-атҡа көндөҙгө сәғәт 3-тән һуң ҡатын-ҡыҙ менән бөтөнләй һүҙгә килешмәҫкә кәрәк, сөнки тәүлектең был мәлендә ҡатын-ҡыҙға гел уңыш йылмая. Эштә үрләтеүҙәрен теләһәгеҙ, етәксегеҙ менән был турала иртән түгел, ә сәғәт берҙәр тирәһендә һөйләшегеҙ.

■ Һаулығығыҙ ныҡлы булһын, тиһәгеҙ, үҙегеҙҙе яратығыҙ. Был формуланы Яңы Зеландиялағы Кентербери университеты психологы Энди Мартенз һәм уның коллегалары уйлап тапҡан. Үҙенде юғары баһалау килеп тыуған һәр хәүеф алдында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа ярҙам итә. Һөҙөмтәлә - нервылар ҙа ҡаҡшамай, йөрәк һәм иммун системаһы ла һау ҡала. Шулай булғас, үҙегеҙҙе яратығыҙ һәм сәләмәт булығыҙ.

■ Британлылар дәлилләүенсә, кешеләр шишәмбе генә ял көндәре үтеп китеүе тураһында аңлап ҡала һәм тап аҙнаның ошо көнөндә үҙен иң бәхетһеҙ кеше тип тоя, ти Лондондың иҡтисад мәктәбе белгестәре. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар көнөнә ике тапҡыр үҙенең эмоциональ торошо тураһында, әлеге ваҡытта ҡайҙа һәм кем менән булыуҙары тураһында һөйләргә тейеш була. Был мәғлүмәттәр iPhone смартфонының махсус ҡушымтаһы ярҙамында теркәлеп барған. Быға тиклем дүшәмбене ауыр көн иҫәпләргә күнекһәк тә, тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың күбеһе шишәмбе үҙен башҡа көндәргә ҡарағанда насырыраҡ тойған. Быны белгестәр шулай тип аңлата: шишәмбе күпселек халыҡ ныҡлап эшкә тотона һәм ял көндәренең әле йыраҡ икәнлегенә бошона. Ә дүшәмбе барыһы ла үтеп киткән ял көндәрендә алған кәйеф тулҡынында бәүелеүен дауам итә.

■ Әгәр ҙә һеҙ дөрөҫ туҡланмайһығыҙ йәки көн һайын тиҙ әҙерләнә торған ризыҡ ашарға мәжбүр булһағыҙ, мотлаҡ әфлисун һуты эсегеҙ. Буффало университеты эндокринологтары әфлисун һуты ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай, тигән һығымтаға килгән. Был һут профилактик үҙенсәлеккә эйә. Иртәнге аш ваҡытында 1 стакан әфлисун һуты эсеүселәрҙә организм өсөн файҙалы иреккә радикалдар кимәле 47 процентҡа күтәрелгән һәм ҡан тамырҙары ныҡыған.

ЮЛДАР САЙТЫНДА

# ИНТЕРНЕТ СЕЛТӘРҘӘРЕНДӘ...

## Башҡортостан һәм башҡорттар




### Ҡайһы бер башҡорт сайттарына ҡыҫҡаса байҡау

**(yeshlek.ru) Башҡортостан Республикаһының йәштәр порталы.** Был башҡорт сайттары араһында иң беренсе сайт булып "Йәшлек" гәзите редакцияһында тыуғайны. Шунда уҡ башҡорт сайттарының тәүге администраторҙары, чат һәм форумдарҙы ойоштороусылар ҙа тормош һынауын, сыныҡыу үтте. Йәштәр баҫмаһының ҡаҙанышы ла шунда: ул яңы башланғыстарға үсешергә мөмкинлек биреп, уларҙы ирекле осошҡа сығарып ебәрҙе. Был сайт бөгөн үҙаллы тормош алып бара. Уға мөмкин. Сайтты эшләүҙә бик күп ғалимдар, яҙыусылар, журналистар, ғөмүмән, кем үҙ халҡын яҡшы яҡтан күрһәтергә теләй, барыһы ла ҡатнаша.

**(www.bashkirskayakuhnya.com) Башҡорт аш-һыуҙары сайты.** Аш бешереү сәнғәтенә бәйле бик үҙенсәлекле сайт тип әйтергә мөмкин. Әгәр беҙҙең көндәрҙә бер ҡулына сүмес тотҡан, икенсе ҡулы менән компьютер сысҡанына йәбешкән ашнаҡсыны күҙ алдына килтереп булһа, был сайт шулар тураһында буласаҡ. Был сайтты күп яҡлап байытыу мөмкинлектәре лә бар: мәҡәлән, "Йорт эштәре", "Баҡсасылыҡ" һ.б. биттәр өҫтәп...

### "КИСКЕ ӨФӨ" САЙТЫНА РӘХИМ ИТЕГЕҘ!



Башҡорт телендәге аҙналыҡ **"Киске Өфө"** гәзитенең интернетта үҙенең сайты бар: **www.kiskeufa.ru.**

Сайтҡа инеп, баҫманың һәр яңы һаны менән танышa, төрлө конкурстарыбыҙ тураһында мәғлүмәт ала алаһығыҙ. Меңәрләгән матбуғат баҫмалары баҙарында үҙ урыны, үҙ йөҙө, үҙ һүҙе менән айырылып торған "Киске Өфө" гәзитен уҡығыҙ, уның хаҡындағы мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге, бигерәк тә республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәргә лә еткерегеҙ.

Уның виртуаль мөмкинлектәре лә тулыраҡ: башҡорт халҡының үткәнен, бөгөнгөһөн, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен сағылдырған күп темалы форум, чат, фото- һәм видеогалереялар эшләй. Яңы башлаусы администраторҙар был сайттан күп фәһемле нәмәләр алыр ине.

**(urgaza.ru) Был - Баймаҡ районының Йылайыр, Ишмөхәмәт, Татлыбай, Хәйбулла районының Целинный ауыл советы биләмәһендә, Ургаҙа йылғаһы буйында ултырған ойошма һәм предприятиеларҙың тормошо тураһында сайт.** Унда башҡорт Урал арьяғы тураһында археологик, тарихи, фольклор, этнографик һәм башҡа йүнәлештәрҙәге материалдар тупланған. Әйтергә кәрәк, төрлө айырым төбәктәр һәм ауылдар тураһында сайттар интернетта байтаҡ ҡына. Улар һәүәҫкәрҙәр тарафынан тәжрибә рәүешендә эшләнә һәм артабан әллә ни алып барылмай.

**(akmulla.ru) Башҡорт халҡының бөйөк мәғрифәтсеһе Мифтахетдин Аҡмулла тураһында айырым сайт.** Бында уның биографияһынан алып, бөгөн үткәрелеп килгән Аҡмулла уҡыуҙарына тиклем бик күп материалдар табырға мөмкин.

**(komartky.ru) Ойоштороусылар тәҡдим итеүенсә, был сайт - башҡорттарҙың барлыҡ рухи һәм матди ҡомартҡылары хаҡында мәғлүмәтте бергә йыйырға һәм киң ҡулланыусыға тәҡдим итергә ынтылыу емеше.** Ул башҡорттоң "Ил тәкөрһә, күл була" мәҡәле нигеҙендә эшләй. Кемдән нимә таба алалар, шуны ҡуялар. Ысынлап та, унда бик күп төрлө тармаҡтарҙан мәғлүмәткә юлығырға мөмкин.

**(bashkironline.org/forum) Башҡортостан онлайн форумы - ағымдағы ваҡиғаларҙы тикшереү, сәйәхәттәр, телдәрҙе өйрәнеү сайты.** Бында башҡорт теле, уның диалекттары, уның үҫеше буйынса материалдар табырға мөмкин. Башҡорт мәҡәлдәре йыйылмаһы бар. Диалекттар, уларҙың бер-береһе менән бәйлелеге тураһында әңгәмәләр алып барыла. Тел белгестәренең һәм ябай кешеләрҙең үтә ҡыҙыҡлы фекерҙәрен табырға мөмкин.

**(www.platok-shop.ru) Был сайт дебет шәл бәйләүселәр һәм уларҙың төрҙәре тураһында:** Башҡорт дебет шәлдәре, Ырымбур шәле исеме алып, бар донъяға таралып киткән. Ә сығышы менән улар, Ырымбур баҙары аша донъяға сыҡһа ла, Ейәнсура районынан - ундағы кәзәләрҙең дебетенән һәм ундағы оҫталарҙың ҡулынан.

**(www.yeshlek-gazeta.ru) Бөтөн донъя интернет селтәрен башҡорт ҡулланыусыһына башҡортса тәүләп асып биреүсе булараҡ, "Йәшлек" гәзите был өлкәлә һаман да иң алдынғы урындарҙы биләп тора.** Был - даими яңыртылып тороуы һәм иң яңы ҡаҙаныштарҙы индереү буйынса ла иң яҡшы сайт. Ул төрлө башланғыстар ҡулланыу йәһәтенән үҙ тиңдәштәренән бер башҡа алдараҡ бара.

**(www.shonkar.ru) Йәштәр баҫмаһы булараҡ, "Шоңҡар" журналы яңылыҡтарҙы бик әүҙем үҙләштереүсе баҫма.** Уның сайты ла, башҡаларҙан айырмалы рәүештә, тик саф башҡортса "һөйләшеүсе". Унда әүҙем авторҙарҙың, шул иҫәптән бөн фәҡирегеҙҙең дә, шәхси блогы бар. Әйткәндәй, интернет селтәрено сығыр өсөн мин башта "Стихи.ру" шиғриәт порталында үҙемдең шәхси битемде булдырғайным. Унда әле рус теленә тәржемә ителгән әҫәрҙәрем эленгән. Аҙаҡтан, компьютерсы дуҫтарҙың тәҡдиме менән, үҙемдең шәхси сайтты асырға булдым: **www.sharafi.ru.** Мин уны күп яҡлы шәхси журналым итеп күрәм: теләгән кеше кереп, ҡуйылған әҫәрҙәрҙе уҡып та сыға ала, фекерҙәрен дә белдерә. Әлегә ул башҡорт яҙыусылары араһында беренсе сайт, киләсәктә минең һымаҡтар күбәйер, тигән өмөттәмен.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бынан бер нисә йыл элек, Башҡортостан ауылдарында ла интернет аша ғына мәғлүмәт алып, аралашыу ҡорбоҙ, тиһәләр, моғайын, берәү ҙә ышанмаҫ ине. Әммә был - ысынбарлыҡ, һәм унан ҡасып та, етешһеҙлектәргә күҙ йомоп ҡына уларҙы хәл итеп тә булмай. Шуға күрә, хаталарҙы төҙәтеп, алда торған икенсе үрҙәрҙе яуларға ынтылырға кәрәк.**

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**
**(Аҙағы. Башы 42-43-сө һандарҙа).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Кәбииру** - ҙур һәм бөйөк заттыр. Уның ҡылыҡтарында һәм сифаттарында булған бөйөклөктө бер нәмә лә һәм бер кем дә кәмөтә алмай. Был исемде мосолман һәр көн йөҙ мәртәбә уҡыһа, халыҡ араһында ҡәҙерле һәм ғиззәтле булыр.

**Әл-Мүҡиитү** - һәр йәнле нәмәгә ризыҡ биреүсе, ул ризыҡтың күләмен билдәләүсе. Балаһы яуыз холоҡло булһа, ошо исемде ете мәртәбә уҡып, буш һауыт эсенә һыу тултырып уға өрһә, эсерһә, бала изге холоҡло булыр.

**Әл-Хәсиибү** - һәр нәмәнең хисабын белеүсе. Бөтөн ниғмәттәрен үҙенең ҡолдарына һәм барлыҡҡа килтергән тәбиғәтенә кәрәк ҡәҙәрле сама менән биреүсе. Был ниғмәттәр уларҙың барыһына ла туҡланыу өсөн етерлек булыр. Кесе йоманан башлап ете кис һайын ошо исемде етмеш мәртәбә әйткән бәндәһен Аллаһы Тәғәлә күҙ зәхмәтенән, дошмандарынан һәм ҡараҡтарҙан һаҡлар.

**Әл-Жәлиилү** - ололоҡ хужаһы. Ысын бөйөклөк Уға ғына хас. Был исемде зәғфран менән яҙып, үҙендә йөрөтһә, ярҙамсылары араһында оло ихтирамға һәм ғиззәткә эйә булыр.

✓ *Ә беҙ әле Мөжәүир хәҙрәт кеүек изгеләр ерләнгән урынды хөкүмәт ҡурсыуына алып, әүлиәләр ҡәберенә зыярат ҡылырға тип йыраҡтан килеүсе мосафирҙар өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу тураһында хыялланабыҙ ғына.*



ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК



# МӨЖӘҮИР ХӘҘРӘТ -

## башҡорттоң бөйөк әүлиәһе

*Аллаһ теләгән кешеһенә хикмәт бирә, ә кемгә хикмәт бирелгән - уға ҙур изгелек тә бирелгән. Ләкин быны аҡыл эйәләре генә иҫендә тота.*
**("Әл- Бәҡара" сүрәһенең 269-сы аяты).**

Иншалла, остазыбыҙҙың теләге ҡабул булды. Уның исеме менән бәйле хәтирәләр халыҡ күңеленән бөгөн мул һыулы йылғалай ағыла.

Мөжәүир хәҙрәт өс тапҡыр өйләнә. Барлығы ун дүрт балаға атай була. Ун бала әсәһе, һуңғы ҡатыны Гөлйемеш абыстайҙы кешеләр яҡшы иҫләй. Ҡаҙанында ашы бешеп, самауыры ҡайнап ултырыр, хәҙрәттең күҙенә генә ҡарап торор, һәр әйткәнен үтәр ине, тиҙәр. Ҡап-ҡара ҡашлы, ап-аҡ йөҙлө, мыкты кәүҙәле сибәр ҡатын була Гөлйемеш. Өҫтөнә сиған бисәләренекенә тартым шырышмай торған ебәк күлдәк кейә, ҡалын толомонон осона киң бетеү таға торғайны, тиҙәр.

Йылдар үтә. Бөгөнгә көндә, Аллаға шөкөр, ун дүрт баланан, исмаһам, берәүһе, иң кесеһе иҫән. Ул Сиражетдинов Мөхәммәт Мөжәүир улы, 1945 йылда тыуған, хәҙерге көндә Сибай ҡалаһында йәшәй. Белеүселәрҙең бәҙеләре был олпат кәүҙәле, төҫкә-башҡа таҙа, айыҡ аҡыллы, баҫалҡы ирҙе - атаһына, икенселәре әсәһенә оҡшата. Үҙ ваҡытында ауыл хужалығы институтын тамамлаған, ветеринар һөнәре алған, һайлаған һөнәре буйынса оҙаҡ йылдар эшләп, инде хаҡлы ялға сыҡҡан Мөхәммәтте Сибай, Баймаҡ яҡтарында яҡшы беләләр. Олатайҙан ҡалған ҡомарткылай күреп, уға ихтирам һәм һөйөү менән ҡарайҙар, атаһы тураһындағы хәтирәләрҙе уның ауыҙынан ишетергә теләйҙәр. Ә ул, күңеле килһә, был хәтирәләрҙе көндәр буйы ултырып һөйләй ала.

- Бала саҡ хәтирәләренән, иң беренсе, ҡайһы бер кешеләрҙең, бигерәк тә уҡытыусыларҙың, беҙҙе мулла балаһы тип ситләтергә тырышыуы иҫтә ҡалған,- ти ул. - Ураҙа тотмайбыҙмы икән, тип бөтә класс алдында һыу эсереп ҡараһындармы, намаҙ уҡымайбыҙмы икән тип, йәшеренеп өйгә килеп тикшерһендәрме - ҡыйын була торғайны. Ошо хәл атайыбыҙҙы дөрөҫ баһаларға ҡамасаулағандыр, күрәһең. Үҫә төшкәс кенә мин уның ябай кеше булмауын аңланым. Көндәр буйы һәр бер килгән кешенең аһ-зарын тыңлау, барыһына ихлас ярҙам итеү өсөн ниндәй оло йөрәкле, кеше йәнле, сабыр булыу кәрәк. Атайымдын: "Минә юғарынан шулай ҡушылған, ерҙәге бурысымды атҡарам. Бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн",- тигән һүҙҙәренең мәғәнәһен дә тик хәҙер генә аңлайым.

Мөжәүир хәҙрәттең хикмәттәрен аҙым һайын һөйләй халыҡ. Ҡуянтау, Бикеш ауылдарындағы бер осрашыуҙа егерменән кеше үҙ хәтирәләре менән уртаҡлашты. Шуларҙың береһе - Сәйетколов Шәфҡәт һөйләгәндәрҙән:

- Әсәйем нығ ауырып китте. Балнисҡа бармайым, тик хәҙрәт олатайға ғына алып барығыҙ, ти. Өс саҡрым үткәйнек, юлда бер егет тора. Мотороллеры боҙолған. Эргәһендә бер инструменты ла юҡ. Нимә кәрәк, барыһын бирҙем дә, эше бөткәс, шунда яткан таш аҫтына һалып ҡалдырырға ҡуштым. Манһырға барып еттек. Абыстайы килеп сыҡты. Олатайығыҙ күптән һеҙҙе көтөп ултыра, ти. Инеп күрештек. Хәҙрәт әйтә: "Һеҙ юлға әллә ҡасан уҡ сыҡтығыҙ. Тура килмәнегеҙ. Юлда берәүгә мәрхәмәтлек күрһәттегеҙ",- ти. Әсәйемә: "Ҡыҙым, миндә булғайның бит, әйткәнде тыңламаның. Был мин өшкөрә торған ауырыу түгел, һинә тиҙ арала хирургҡа барырға кәрәк. Иншалла, ғүмерең оҙон, ҡайғырма", тине. Тоҙ өшкөрөп бирҙе. Абыстайы сәй ултыртты, көсләп- көсләп сәй эсерҙеләр. Беҙ ҡайтыр алдынан: "Улым, теге инструменттарың таш аҫтында ята, онотоп ҡуйма, ҡайтышлай ал",- ти. Мин олатайҙың беҙ юлда килгәндә теге егетте осратып, уға ярҙам иткәнде белеүенә, бер ниндәй рентгенһыҙ әсәйебеҙҙең ауырыуын дөрөҫ билдәләүенә һаман хайран ҡалам. Олатай ҡушҡанса, беҙ әсәйҙе больницаға алып барҙыҡ. Операция яһанылыр. Бынан һуң һауығып оҙаҡ йәшәне...

Мөжәүир хәҙрәт менән булған бындай хәтирәләрҙе аҙым һайын ишетергә мөмкин. Сөнки уның илгә иткән изгелеге иксеҙ- сикһеҙ. Ошо көндәрҙә Болгарияның бөтә донъя белгән халыҡ табибы, күрәҙәсе Ванга тураһында ҡабаттан уҡыйым. Ул ерләнгән Рупите ҡалаһындағы Изге Петка тигән урын шау сәскәгә күмелгән. Ә беҙ әле Мөжәүир хәҙрәт кеүек изгеләр ерләнгән урынды хөкүмәт ҡурсыуына алып, сәскәләргә күмеү, әүлиәләр ҡәберенә зыярат ҡылырға тип йыраҡтан килеүсе мосафирҙар өсөн тейешле шарттар тыуҙырыу тураһында хыялланабыҙ ғына. Миҫал эҙләп йыраҡ йөрөйһө түгел, Ҡаҙағстанда, мәҫәлән, әүлиәләр зыяраттарын тергеҙеү, һаҡлау президенттарының махсус программаһына ярашлы башҡарыла. Был хаҡта "Киске Өфө" гәзитендә яҙылып сыҡҡайны инде. Ошо программа эшләй башлағандан һуң ҡаҙаҡтар йәшәгән төбәктең йылдам үҫеше, сәскә атыуы тураһында ла әйтелгәйне унда. Билдәле, әүлиәләр рухы ярҙам итә бындай янырыуға, үҫешкә. Башҡортостанда халыҡ хәтерендә йәшәгән әүлиәшәхестәр бихисап, әммә беҙ уларға үҙ ихтирамыбыҙҙы күрһәтеүҙән тартынабыҙ, уларҙың ҡәберҙәрен дә белмәйбеҙ, белгәндәренеке лә ташландыҡ хәлдә. Мөжәүир хәҙрәт тере сағында: "Үлгәндәргә хөрмәт бөтһә, тереләргә лә һан ҡалмаҫ. Онотмағыҙ, милләттең дәрәжәһен уның изге рухлы кешеләре билдәләй",- тигән.

"Мөжәүир хәҙрәт" тигән китапты яҙыуымды белгәс, күптәр рәхмәт әйтте. Мине хаттар, хәтирәләр менән күмделәр. Ниҙәр генә юҡ ул хаттарҙа. Уларҙы документ итеп, һәр береһен ҡәҙерләп һаҡлайым.

Мөжәүир хәҙрәтте, нахаҡ бәлә тағып, төрмәләргә япҡандарын, ямаһатын таратып, кешеләрҙе унан биҙҙерергә тырышҡандарын, нахаҡтан яуыз уйҙырмалар яҡҡандарын яҙалар. Бөгөн килеп, Хоҙай Тәғәләмдең биргәненә мең рәхмәт, тибеҙ. Иншалла, ғәҙеллек тантана итә. Әлбиттә, минең китап, бәлки, тейешле кимәлдә лә яҙылмағандыр. Дини темаға яҙылған тәүге әҫәрем бит. Әммә иманым камил, киләһе быуындар өсөн был китабым, һис шикһеҙ, бик кәрәкле әсбап буласаҡ. Уны уҡып, Мөжәүир хәҙрәт тураһында тулы мәғлүмәт аласаҡтар. Фәнни өлкәләме, дини яҡтанмы, тәрбиәүи эштәр өсөнмө, художестволы әҫәр яҙғандамы- уға шикләнмәйенсә таяна аласаҡтар. Сөнки ул тик факттарға таянылған, унда тик дөрөҫлөк яҙылған.

**Лира ЯҠШЫБАЕВА.**

**(Башы 43-сө һанда).**

**Әл-Кәриимү** - йомарт бәндәләрҙе хөрмәт итеүсе, Үҙенең вәғәҙәһен үтәүсе. Биргән бүләктәре өсөн Ул борсолмай. Күпме хөрмәт, бүләк бирһә лә Уның хөрмәттәре кәмемәй. Был исемде уҡырға ниәт иткән кеше Аллаһы Тәғәләнең - үҙен яралтыусыһының хөрмәтенә лайыҡ булыр.

**Әл-Раҡиибү** - һәр нәмәне күҙәтеп, ҡарап тороусы. Уларҙың барса ғәмәлдәрен һәм ҡыланыштарын белеп тороусы. Уның күҙәтеүенән бер кем дә йәшеренеп ҡаса алмай. Ете мәртәбә был исемде уҡыған кешене Аллаһы Тәғәлә үҙен дә, ғаиләһен дә әфәттән һаҡлар.

**Әл-Мүжиибү** - доға һәм теләктәргә яуап биреүсе, ҡабул итеүсе. Ҡолдарының һорағанын биреүсе, мохтаждарҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүсе. Был исемде даими уҡыған кешенең теләктәре ҡабул булыр.

**Әл-Үәсиғү** - Үҙе яралтҡандарға ниғмәт биреүсе. Уның ниғмәттәре сикһеҙ. "Йәә Үәсиғү" - тип уҡыған кеше өсөн ризыҡ ишектәре асылыр.

**Әл-Хәкиимү** - хикмәт эйәһе, Уның һәр эше хикмәтле һәм дөрөҫ. Ул һәр нәмәнең асылын белә, һәр мәсьәләне дөрөҫ һәм ғәҙел итеп сисә. Был исемде күп уҡыған бәндәнең тәненә һәм ҡәлебенә Раббыбыҙ хикмәт нурын бирер.

**Әл-Үәдүүдү** - үҙенең ҡолдарын һөйөүсе, яҡшы бәндәләрҙе донъя һәм Әхирәт дәрәжәләренә күтәреүсе. Ике кеше араһында дошманлыҡ була ҡалһа, ашар аҙыҡтарына мең дә бер мәртәбә ошо исемде әйтеп ашатылһа, дошманлыҡтары бөтәр.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Юғары Мин менән берлекте тергеҙеү

**Хәҙер һеҙ эшләргә тейешле процедура еңел булһа ла, уның һөҙөмтәләре һуңынан күренәсәк. Йәғни, уның һөҙөмтәләре күп яҡлы.**

Үҙегеҙҙең Ижадсыға тоташҡанлыҡты аңлап, яңы эске тормош менән йәшәй башларһығыҙ. Үҙегеҙҙең ижад итеүҙәге урынығыҙҙы яҡшыраҡ аңларһығыҙ. Һуңынан, артабанғы бүлектәрҙе уҡып, Юғары Минегеҙҙе тулыһынса сағылдырыуға һәм байлаҡ, һаулыҡ, мөхәббәт һәм тыныслыҡ алып килеүсе ағымға асылырға сираттағы аҙымығыҙҙы яһарһығыҙ.

Бәләкәй генә кәңәш: был турала бер кемгә лә һөйләмәгеҙ. Был рухи тәжрибәне һөйләп бирер өсөн кәрәкле һүҙҙәр эҙләй башлаясаҡһығыҙ. Ә һүҙҙәр етмәйәсәк. Шуға ҡарамаҫтан, был эшкә тотоноп, тәжрибәгеҙҙе һүҙҙәр менән асып бирергә тырышһағыҙ, үҙегеҙ ҙә һиҙмәҫтән, уны һүҙҙәрегеҙгә тап килтереп, үҙгәртә башлаясаҡһығыҙ. Бының өсөн һеҙ байлыҡ, сәләмәтлек, мөхәббәт һәм тыныслығығыҙ менән түләйәсәкһегеҙ. Тәжрибәгеҙҙе боҙмағыҙ. Әйҙә ул саф, тере һәм эшлекле булып ҡалһын.

Нимә эшләргә тейешлегегеҙ, бәлки, һеҙгә таныш та тойолор. Был турала Уолтер де ла Мер былай тип яҙа: "Тәжрибә минә фонарҙың яҡты нуры кеүек күренде. Ул аңда быға тиклем булған, әммә тоноҡ ҡына шәйләнгән нәмәне яҡтыртып ебәрә"

Друидтар Юғары Мин менән бәйләнеште файҙаланыусыларҙан тәүгеләр түгел. Ошо алымға уларға тиклем мең йыл элек тә мөрәжәғәт иткәндәр. Был кеше уға мөрәжәғәт итергә ҡарар ҡылыу менән, хәтер өҫкә ҡалҡып сыҡҡан бик һирәк ваҡиға. Ул: "Шаҡығыҙ, мин яуап бирермен", - ти.

Һеҙ шаҡырға әҙерһегеҙме?

* * *

**Түбәндә бирелгән инструкцияны уҡығыҙ. Уны китапты бер минутҡа ситкә алып ҡуйырлыҡ итеп ике йәки өс тапҡыр уҡығыҙ.**

**Үҙеңдең Юғары Минең менән осрашыу мөмкинлеге биргән күнегеү шундай:** уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ; асыҡ итеп бер нисә тыныс картинаны күҙ алдығыҙға килтерегеҙ; бүлмәгә кеше инә, тип күҙаллағыҙ. Ул һеҙҙең кеүек үк, тик бер метр - метр ярымға һеҙҙән бейегерәк һәм аҡ яҡтылыҡҡа сорналған; өс тапҡыр эстән генә: "Мин һине яратам һәм һинең ярҙамыңа мохтажмын", - тип ҡабатлағыҙ; уйығыҙҙа ғына урынығыҙҙан торогоҙ, был кеше менән ҡосаҡлашығыҙ һәм кире урынығыҙға ултырығыҙ; күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм үҙегеҙгә энергияле итеп ,"Мин үҙ аңымда һәм Ижадсыға яҡынраҡмын", тип әйтегеҙ.

Китапты ситкә алып ҡуйығыҙ һәм күнегеүҙе ҡабатлағыҙ. Ошо тәжрибә аша үтеп, мәлдең мөһимлеген аңлау өсөн бер ни тиклем ваҡытҡа уҡыуығыҙҙы туҡтатып торогоҙ. Бер сәғәткә булһа ла ярай.

Һеҙҙә үҙгәреш булды. Был эске үҙгәреш ҡасан да булһа тормошоғоҙҙағы хәл-торошта үҙен һиҙҙерер. Был кеше үҙ-үҙенән, ә яҡшыраҡ юл бармы, тип һораған ваҡытта донъя буйлап таралған психорухи үҙгәреш.

Был рухи уяныуҙың бер сағылышы булып, фәрештәләргә булған ҡыҙыҡһыныу тора. Бөгөн фәрештәләр бестселлерҙарҙа, журнал тыштарында, телевизион шоуҙарҙа ғына күренә. Һеҙҙең Юғары Минегеҙ фәрештәләрҙең энергияһына яҡынлашты. Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙең Юғары Минегеҙгә яҡынланығыҙ. Тимәк, фәрештәләрҙең энергияһына яҡын килдегеҙ. Фәрештәләрҙең энергияһы Ижадсының булдырыусы ҡулы икән... Фекерҙе тамамлауҙы үҙегеҙгә ҡалдырам.

**Роберт СТОУН.**

✔ ***Беҙҙең урмандарыбыҙ, тауҙарыбыҙ, йылғаларыбыҙ - республика халҡының рухи бер өлөшө. Беҙ уларҙан аҡса түгел, көс алабыҙ. Тәбиғәттә һаҡлайыҡ. Ул беҙгә рәхмәтле булыр.***



*ПРЕЗИДЕНТ БЛОГЫНАН*




# ХАЛЫҠТЫҢ ҠАҠШАҒАН ҺАУЛЫҒЫ ӨСӨН...

## Шахтау өсөн дә яуаплы "Сода"

**Торатауҙы һаҡлау мәсьәләһе быға тиклем йәмәғәтселек тарафынан ғына ишетелә ине. Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов экологик проблема буйынса үҙенең фекерен "Тере журнал"дағы блогында белдергәс, ул хәҙер дәүләт кимәлендәге мөһим мәсьәләгә әүерелде. "Сода" буйынса сеймал табыуҙы ябай ғына хәл итеп булмай. Әммә Торатауҙы үҙләштереү - хәл итеү юлы түгел. Альтернатив варианттар эҙләргә кәрәк. Әлегә мине, Торатау эзбиз алыуҙың берҙән-бер һәм ҡотолғоһоҙ юлы, тип ышандырырға тырышалар. Мин риза түгел, хатта шуның өсөн генә булһа ла - иҫәп-хисапты күрмәнем. Бары тик эмоциялар. Миңә варианттарҙы сағыштырып ҡарарға кәрәк. Тимәк, үҙ фекеремдә ҡалам, Торатауға теймәҫкә!" - тип яҙҙы ул. Бөгөн гәзит уҡыусыларға Президент блогындағы фекерҙәрҙе тәҡдим итәбеҙ.**

**buranbay:** Халыҡ ҡурҡа һәм борсола. Бирерҙәрме икән ни? Юҡ, Президент бирмәҫ! Президент - беҙҙең өсөн! Боронғо быуаттарҙан һаҡланып ҡалған уникаль экосистеманы шартлатырға һәм емерергә... Эколог булмаған ябай халыҡ аптырашта... Нисек? Вандалдар! Беҙҙең шихандар хаҡында күпме һөйләнелде һәм яҙылды, бөтөн донъя геологтары мөғжизә күрергә килде. Йәшәгән еребеҙ, нимәбеҙ бар, нимәне һаҡлағанбыҙ, шуның менән ғорурланырға хаҡлыбыҙ. Барыһын да киләсәк быуындар өсөн һаҡларға теләйбеҙ. Ҡыйратырға ҙур аҡыл кәрәкмәй. Урмандарҙы ҡырағайҙарса юҡҡа сығарыу, хайуандарҙы ҡырыу, ураҡ йортобоҙ - Ер планетаһын бысратыу нимәгә кәрәк? Кемдер футбол һәм баскетбол командаларын һатып алһын, яхта тип аталған шәхси лайнерында океанды йөҙөп сыҡһын, завод һәм пароход хужалары балаларының сит илдәге имениеген таһмин итһен өсөнмө? Ә ҡалдыҡтар? Килемгә әйләндерһендәрме? Беҙҙең тотош илебеҙ - сеймал сығанағы. Минең өсөн шәхсән шихандар Тыуған илде көүҙәләндерә. Мин Тыуған илем өсөн үләсәкмен! Шахтауҙан бер сүллек эшләнеләр ҙә инде. Иң бейек, иң осло тау ине. Әйҙә, уны эшкәртһендәр. Унда эшкәртәһе ҡатлам бар әле. Файҙаһы юҡмы? Асыҡ ысул менән, әлбиттә, файҙалыраҡ. Ә шахтерҙар нисек эшләй һуң?

**mamai_ra:** Мин шихандарҙа булманым. Бер тапҡыр Стәрлетамаҡта булдым. Туҡтап торманым, "елеп" үттем. Һуңынан бик ныҡ үкендем. Әммә минең ҡулға Р. Әхмәдовтың "Йылғалар, күлдәр һәм үләндәр тураһында һүҙ" тигән китабы килеп эләкте, һәм мин хәҙер Торатауҙа ла, Ҡуштауҙа ла, Йөрәктауҙа ла, хатта китап яҙылған ваҡытта яртыһы ғына ҡалған Шахтауҙа ла булдым, тип әйтә алам. Бүлек шулай тип атала "Дүрт ярым тау". Ҡыйын булып китә. Былай ҙа еңел түгел...

**leonidnekrasov:** Әлбиттә, бөтөн тауҙарҙы ҡаҙырға, барлыҡ тауҙарҙы ҡырҡырға мөмкин. Уның ҡарауы, завод һәм комбинаттар өсөн тағы бер нисә йылға етерлек сеймал буласаҡ. Тик республика ғына Пасха утрауы кеүек йәнһеҙ булып ҡаласаҡ. "Һынташтар" ғына предприятиеларҙың емерек корпустары сифатында баҫып торасаҡ. Күңелһеҙ күренеш. Улай булмай, тиһегеҙме? Ә беҙ быға яҡынлаштыҡ та инде. Беҙҙең урмандарыбыҙ, тауҙарыбыҙ, йылғаларыбыҙ - республика халҡының рухи бер өлөшө. Беҙ уларҙан аҡса түгел, көс алабыҙ. Тәбиғәттә һаҡлайыҡ. Ул беҙгә рәхмәтле булыр.

**jazamir:** Республиканың эре предприятиелары һатылып бөткән. Ғәҙәттә, предприятиеларҙы һатыу заманса матур яңғыраған "инвестиция йәлеп итеү" тигән термин аша еткерелә. Әммә ысынбарлыҡ инвестицияларҙан алыҫ тора. "Инвестициялар" производствоны һатып алыу өсөн түләнгән иҫәп-хисап факты менән тамамлана. Артабан: оптималләштереү, минималләштереү, эш урындарын ҡыҫҡартыу, төрлө юлдар менән төрлө кимәлдәге һалымдарҙы түләүҙән ҡасыу. Был эре производстволарҙың яңы хужалары бер нәмәне лә инвестицияларға үйламай. Уларҙың бурысы - был производствонан, республиканан мөмкин булғандың барыһын да һығырға, һурырға. Шул уҡ ваҡытта беҙҙән алыҫта йәшәгән, ҡайһы берҙә донъя буйынса бер нисә шундай заводҡа эйә булыусы хужаларҙы төбәктең социаль, экологик хәл-торошо, уның киләсәге, тәбиғәте, киммәттәре ҡыҙыҡһындырмай. Уларға сығымдарҙы мөмкин тиклем кәметеп, күберәк килем алыу мөһим. Нимәгә уларға ниндәйҙер шихан тауҙары тураһында баш ватырға, әгәр уларҙы аныҡ миллиондарға әйләндереп, тыныс ҡына Швейцариялағы Альптар менән һоҡланыу мөмкинлеге бар икән...

**tulip2110:** Норвегияла, тәбиғәткә зыян килтермәҫ өсөн, тау битләүҙәренә юлдар һалмайҙар, ә күп саҡрымдарға һуҙылған тоннель һалалар. Гидроэлектростанцияларҙы ла тау эсенә һалалар. Ә АҠШ-та ниндәй милли парктар бар! Барыһы ла яҡшы уйланылған, яйлы, фәһемле. Ингәндә аҡса алалар - барлыҡ милли парктар өсөн традицион булған 10 доллар; шунда уҡ традицион булған, барлыҡ иҫтәлекле урындар, күҙәтеү майҙандары, йәйәүлеләр өсөн һуҡмаҡтар, рестарандар һәм бәҙрәфтәр күрһәтелгән ентекле карта бирәләр. Визитор-үҙәктә милли парк тураһында барлыҡ мәғлүмәт бар: ниҙәй хайуандар һәм үҫемлектәр осрай, шунда уҡ тейешле әҙәбиәт һәм сувенирҙар алырға мөмкин. Унда тәбиғәткә нисек һаҡсыл ҡарайҙар! Ә беҙҙә барыһына ла еңел-елпе һәм яуапһыҙ ҡараш. Торатау - оҙаҡҡа бармай торған ресурс. Шуға альтернатив сығанаҡтар эҙләргә кәрәк. Киләсәк быуындан тауҙарыбыҙҙы, урмандарыбыҙҙы, бал ҡорттарыбыҙҙы юғалтҡан өсөн ярлыҡау булмасаҡ. Был турала бигерәк тә республика етәкселегенә иҫтән сығарырға ярамай, сөнки һуңынан "Был хәл шул кеше идара иткән ваҡытта булды..." тип яҙасаҡтар.

**kadyrm:** Экологияны иң ныҡ бысратыусы "Сода" һәм "Каустик" етештереү күләмен кәметһә лә булыр ине, былан барыһына ла файҙа ғына. Ә "ниндәйҙер хужалар" үҙ аппетиттарын бер аҙ баҫа ала.

**daut55_kor:** Торатау республика халҡы өсөн (аҫаба халыҡ өсөн генә түгел) Башҡортостандың йөрәге тип ҡабул ителә. Ул - халыҡтың быуаттар менән иҫәпләнгән тарихы, ул - халыҡтың легендалар һәм риүәйәттәрҙә данланған хәтерә. Башҡортостан халҡы өсөн Торатау үҙенсәлекле тәбиғәт бүләге булараҡ та яҡын. Башҡортостандың йөрәгән, Рәсәйҙең бер өлөшөн физик юҡ итеүгә ынтылышты бер ниндәй иҡтисади йәки башҡа ҙәлил менән нигеҙләп булмай.

Минең ауылымдан саҡ ҡына өҫтәрәк (йылға буйлап), Юшатыр йылғаһы эргәһендә текә Һунарсы тауы бар. Был Түлгән районы элек Башҡортостан АССР-ына ҡарай ине. Тауҙа шундай мөғжизә булды - текә битләүҙә, түбәһенән саҡ ҡына аҫтараҡ, мунса бураһынан да ҙурыраҡ дүрткел таштар торор ине. Былдай таштар йылға буйында, тауҙың итәгендә лә булды. Бала саҡта беҙ был урындарҙа уйнай, бер-беребеҙгә таштарға бәйле легендалар һөйләшә инек. Тау тәбиғәт ҡомартҡыһы ине, бәлки, дәүләт тарафынан һаҡланған территориялар исемлегенә лә ингәндер. 60-сы йылдарҙа колхоз етәкселеге ҡушыуы буйынса был таштар шартлатылып, төҙөлөш өсөн ҡулланылды. Ул ваҡытта мин Өфөлә мәктәп-интернатта уҡый инем, был мәхшәрҙе күрмәнем. Быны шулай хәҙер таштарһыҙ, әммә йөрәктәге таш менән ярты быуат самаһы йәшәйбеҙ. Ведомство йәки башҡа мәнфәғәттәрҙең дөйөм кешелек, донъяуи мәнфәғәттәрҙән өҫтөн тороуына юл ҡуйырға ярамай. Әйткәндәй, Эквадор, үҙенең бай нефть сығанаҡтарын "тундырған" өсөн генә донъя йәмәғәтселегенән ҙур аҡса алырға ниәтләй. Был "давай-давай" принцибына ҡаршы торған Цивилизация. Ер берәү, ул изге. Әгәр уны беҙ, унда йәшәүселәр һаҡламаһаҡ, кем һаҡлар һуң?

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостан Республикаһы буйынса Ер аҫтын файҙаланыу идаралығы начальнигы Рәсих Хәмитов белдереүенсә, 2003-2008 йылдарҙа уҡ федераль бюджет средстволары иҫәбенә геологик разведка уҙғарылған. Шуның һөҙөмтәһендә Стәрлетамаҡтан 75 саҡрым алыҫлыҡта Ҡаран һәм Ғүмәр эзбизташ ятҡылыҡтары табылған. Уны сода етештереүҙә файҙаланып була. Ятҡылыҡтарҙа химик йәһәттән таҙа эзбизташ запастары күләме 200 млн тонна самаһы тәшкил итә. Әлбиттә, "Сода" өсөн 75 саҡрымда ятҡан түгел, ә танау төбөндә, ун саҡрым самаһы алыҫлыҡта ятҡан Торатау ҡулайлыраҡ. Сығымдар түгәһе түгел. Әммә... Хоҙай юл ҡуймаясаҡ быңдай вәхшилеккә. "Сода" предприятиеһы ( тап предприятие үҙе, хужалары алышынып тора бит инде) әле Шахтау өсөн дә, тирәяҡта йәшәүсе ҡала-ауылдарҙағы халыҡтың ошо производство арҡаһында ҡаҡшаған һаулығы өсөн дә яуап бирәсәк киләсәктә...**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**30 октябрь "Люстра"** (И. Зәйниев), трагикомедия
**2 ноябрь "Ун икенсе төн"** (У. Шекспир), комедия

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 октябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия
**31 октябрь "Һөйөм, һағынам"** (М.Ғиләжев), комедия

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 ноябрь "Ҡыҙыҡ-Мәҙәк"** эстрада-көлкө театрының 20 йыллыҡ иҗад юбилейына арналған юмористик программаға саҡыра. Шаян, мажаралы, мауыҡтырғыс кисәлә Вәлит Илембәтов, Редик Фәсхетдинов, Фәрүәз Мөхәмәтшин, Фаяз Йәнтүрин, Ғәлиә Моратова, Хәмит Теләмов, Зөлфиә Әхмәтова, Юнир Салауатов ҡатнаша.
**Башлана 19.00.**

**КЕМ АЛЫҠ?**
**1. Вәлит Илембәтовтың сәхнәләге исеме кем?**
**2. 78 йәшлек "көлкө тоҡсайы" кем ул?**
**3. "Ҡыҙыҡ-мәҙәк" эстрада-көлкө театры ҡасан ойошторола?**

*ИҒЛАН*
Һынлы сәнғәт буйынса рәсем уҡытыусыһы талап ителә.
Тел.: **8-917-42-16-313**.

✓ *Кеше һарыҡ көтөүе логикаһына бирелмәҫкә тейеш. Ул көтөүҙә юлбашсы һарыҡ соҡорға һикерһә, барыһы ла уның артынан һикерә. Улар "Ниңә беҙ ҙә һикерергә тейеш?" тип уйламай. Юлбашсы һикергәс, был дөрөҫ юл, тип уйлай улар...*



*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БАРМЫ ИКӘН БЕҘҘӘ...

## "микән" һүҙе?

**Беҙ, кешеләр, үҙебеҙгә нисек уңайлы, телде шулай борғолап һөйләшергә күнеккәнбеҙ. Урыҫсанан "может", "патамушто", "незнай", "если" кеүек һүҙҙәр алмаштырғыһыҙға әйләнеп, телмәребеҙҙә ныҡлы тамыр йәйҙе. Уларҙы ҡулланмаһаҡ, һөйләшеүебеҙҙең бөтөнләй "рәте" юҡ тиерлек, һүҙ бутҡаһы тамам ҡаныбыҙға һеңә бара.**

Төрлө боҙоҡлоҡтарҙың яҙма телмәребеҙгә лә инеп оялауы күңелде ҡыра. Гәзит, журнал, хатта китаптарҙа "микән" йыш ҡулланыла. Башҡорт телендә ундай һүҙ бөтөнләй юҡ, ә быны ***-мы*** һәм ***икән*** кисәксәләре бар. Улар айырым һүҙҙәргә, шулай уҡ бөтә һөйләмдең йөкмәткеһенә өҫтәмә мәғәнә биҙәктәре биреүсе ярҙамсы һүҙҙәр ролен уйнай, тип әйтелә ҡағиҙәлә. Башҡорт телендә кисәксәләр байтаҡ һәм төрлө: көсәйтеү, раҫлау *(да баһа, бит, инде һ.б.)*, икеләнеү *(-дер, -лор, -ҙыр һ.б.)*, һорау *(-мы, -мы ни, -ме икән һ.б.)*, сикләү *(ғына/генә, уҡ)*. Яҙыуҙа кисәксәләр күп осраҡта айырым яҙыла. Беҙҙе борсоған "микән"гә туҡталайыҡ: ***-мы, -ме, -мо, -мө*** һорау кисәксәләре һүҙгә ҡушылып яҙыла, мәҫәлән, **һалдымы, кәрәкме, һөйҙөңмө, боролдоңмо**. Ә инде ***ни, икән*** тигән өлөштәре айырым яҙыла, йәғни ***һалды микән*** түгел, ***һалдымы икән***, ***һалдымы ни***. Шулай уҡ ҡалған һүҙҙәр кәрәкме икән, һөйҙөңмө икән, боролдомо икән тип яҙыла. Һөйләгәндә һорау кисәксәләренең ***ы, е, о, ө*** һуҙынҡы өндәре ***икән*** кисәксәһенең ***и*** өнө менән ҡушылыуы арҡаһында ***микән*** тип әйтәбеҙ, әммә был нисек әйтәм, шулай яҙам, тигәнде аңлатмай.

"Микән" һүҙен йышыраҡ шағирҙар ҡуллана. Бына бер шиғырҙан өҙөк:

Һәләк үпкәселһең, ваҡ-төйәккә
"Келт" итә лә ҡала күңелгенәң.
Бейеклеккә рухың ынтылмағас,
Ғәйеп эҙләүҙәрең микән минән.

Ғәҙәттә, был һүҙ шиғыр юлдарының ритмын, ижек һанын һаҡлап ҡалыр өсөн ҡулланыла. Лирик әҫәрҙә уны яҙыр өсөн үҙенә айырым бер ҡанун сығарылғанын да онотторға ярамай бит, йәғни ***эҙләүҙәреңм(е) икән***, тип яҙабыҙ. Был - ике һуҙынҡыны ҡушып, беҙ теләгәнсә, ***микән*** тип уҡырға мөмкин икәнлегенә ишара.

Быйндай миҫалдар бихисап. Кемдеңдер, үҙенә уңайлы һүҙҙәрҙе уйлап сығарып, башҡорт теле грамматикаһын боҙорға хаҡы юҡтыр. Ҡалыплашҡан, раҫланған, бөтәһе өсөн дә бер ҡағиҙә булдырылған икән, һүҙҙәрҙе лә фәҡәт уға буйһоноп, дөрөҫ яҙырға тейешбеҙ.

**Әлиә ӘМИРОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*АТЫҢ КЕМ?*

## АТА-ӘСӘҺЕ ҺАЙЛАҒАН ИСЕМДӘР



Һеҙ һүрәттә күргән нурлы йөҙлө был сабыйҙар Әбйәлил районы Хәмит ауылынан бер туған Мәҙинә, Нурғаян һәм Сыңғыҙ булыр. Ата-әсәләре Сәфинә менән Рәфил Мөхәмәтйәновтар уларға ана шундай матур-матур боронғо исемдәр бүләк иткән. Исемдәре матур яңғырашлы ғына түгел, ә тәрән мәғәнәгә лә эйә: Мәҙинә - мосолман исеме, Ғәрәбстандағы ислам мәҙәниәте үҙәге булған Мәҙинә ҡалаһы исеменән алынған. Ҡыҙым иманлы, тәүфиҡлы булһын, тип теләп, был исемде уға атаһы һайлаған. Нурғаянға ла исемде атаһы ҡуша. Уның исеме ике һүҙҙән алынған һәм: нур - нурлы, яҡтылыҡ һибеүсе, ғаян - билдәле, арҙаҡлы, күренекле тигән мәғәнә бирә. Ә кинйә малай Сыңғыҙға исемде Фирҙәүес инәһе һайлай. Бөтә ер йөҙөндә киң билдәле был исем бөйөк, көслө, ҡеүәтле, ҡөҙрәтле тигәнде аңлата.

Ана шундай матур исемдәр йөрөтә был сабыйҙар. Иң мөһиме: ата-әсәләрен ҡыуандырып, ағалары Раян менән Сарьянға иш булып, аҡыллы, уңған, тәүфиҡлы булып үҫеп етһендәр, бәхетле булһындар.

**Зәкирә АБДУЛЛИНА.**

*БАШҠАТЫРҒЫС*

## ТАШ ҺАУАЛА ТУҠТАҒАН...

**2-се башҡатырғыс:**

Аристотелдең уҡыусыһы, донъяның бөйөк фәйләсүфе, ғалимы, шағиры,табибы Ибн-Сина-Әбүғәлисинаның (980-1037 й.й.) үҫмер генә сағында өлкән табиптар менән ваба эпидемияһы ваҡытында вафат булған кешеләрҙең мәйетен яндырып йөрөүен ишетеп ҡалған әмир Хамада Шәмс-әд-Дәүлә йәш табипты үҙенең һарайына саҡыра. Йәш Әбүғәлисина һарайға инеп килгәндә әмир уны ихатаһы алдында ҡаршылай. Улар бер-береһенә ҡаршы килеп, 2-3 аҙым етмәй туҡтап ҡала. Әмир ерҙән таш ала ла, йәш лекарь яғына ташлай. Осоп килгән таш бер нисә секундҡа һауала аҫылынып тора, шунан ергә төшә.

- Мин ошо ташты нисек итеп һауала туҡтата алдым? Шуны әйтә алһаң, һиңә һарайым асыҡ. Күпме теләйһең, шунса ашап-эсерһең, йәшәрһең, һарайымдың китапханаһы ла һинең ихтыярҙа, - тигән әмир йәш Әбүғәлисинаға.

Әлбиттә, йәш табип әмирҙең нисек итеп һауала ташты туҡтата алыуының серен әйтеп бирә алған һәм әмир уны һарайына үткәргән. Әбүғәлисина әмирҙең һарайында 25 йыл ҡайғыһыҙ йәшәгән, ундағы бар китаптарҙы уҡып сыҡҡан, беҙ белгән бөйөк Иб-Синаға әүерелгән.

**Һорау: Әмир нисек итеп ташты һауала туҡтата алған?**

## ӘБЕЙ ҠАБАЛАНА

**1-се башҡатырғыстың яуабы:**

Асфальт буйлап йәйәү атлаусы әбейҙең тапҡырына еңел машина килеп туҡтай һәм кабиналағы йәштәр унан Солтан ауылына юлды һораша. Әбей юлды күрһәтә һәм үҙенең дә шул ауылға барыуын әйтә. Йәштәр уға: "Инәй, әйҙә, машинаға ултыр, урыныбыҙ бар. Бер юлы юлды ла күрһәтерһең", - тип өндәшә. Ләкин әбей машинаға ултырыуҙан баш тарта, сөнки ул бик ҡабаланып китеп барған була. Ни өсөн әбей машинаға ултырмаған? Сөнки йәштәр уға машинаға ултырырға тәҡдим итә һәм юлды күрһәтеүен генә үтенә. Ә ҡабаланған әбейҙең машинала ултырырға ваҡыты бармы ни? Шуға күрә ул юлды күрһәткән дә артабан киткән. Әгәр ҙә йәштәр: "Әбей, әйҙә беҙҙең машинаға ултыр ҙа Солтан ауылына тиҙ генә машина менән барып етербеҙ", - тиһә, әбей машинаға ултырырға риза булған булыр ине.

**Нәзирә АЙЫТОВА.**

**Иҫкәрмә: Был яуаптың бер генә варианты. Һеҙҙән тағы ла яуаптар көтәбеҙ.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БИШ ИҪӘРГӘ ТҮГЕЛ,

### бер аҡыллыға кәңәш ит

Һәр кем ҡартлыҡҡа тиклем йәшәргә ынтыла, ҡартлыҡҡа барып еткәс, уны әрләүҙән бушамай.

**(Цицерон).**

Кеше үҙен башҡаларҙан аҫта йә өҫтә тип тойған саҡта йәмғиәттә бер ниндәй ҙә тигеҙлек булмаясаҡ.

**(Махатма Ганди).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер кешенең яратҡан ишәге була. Ул уны Шванти Дирайя тип исемләп йөрөтә. Был кеше ошо ишәге ярҙамында батшаға хеҙмәт итә, уның барлыҡ йөктәрен ташый. Берҙән-бер көндө Шванти Дирайя үлеп китә. Йөк ташыусы ҡайғыһынан сәсен яп-ялтыр итеп ҡыра һәм изге һыу менән ҡойона. Был илдә иң яҡының йә шәхес дәрәжәһендәге кеше үлгәндә генә шулай итәләр. Икенсе көндө йөк ташыусы батша һарайына барһа, уны батшаның вәзире күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти йөк ташыусы. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти вәзир. "Әлбиттә, шулай ит" , - ти йөк ташыусы. Вәзир шулай итә лә. Уны батшаның кәңәшсеһе күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һораша. "Һин ишетмәнеңме ни? - ти вәзир. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша кәңәшсеһе. "Әлбиттә, шулай ит" , - ти вәзир. Сәсен яп-ялтыр итеп ҡырған кәңәшсеһен күргәс, батша аптырап китә һәм ни өсөн шулай эшләүе менән ҡыҙыҡһына. "Батшам, кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..."- ти кәңәшсеһе. "Улай булғас, миңә лә сәсемде ҡырырға һәм изге һыу менән ҡойонорғамы ни инде? - ти батша. "Әлбиттә, шулай ит" , - ти кәңәшсе. Батша шулай итә лә. Уны батшабикә күреп ҡала һәм ни өсөн сәсен ҡырыуы тураһында һорай. "Һин ишетмәнеңме ни, һөйөклөм? - ти батша. - Кисә Шванти Дирайя үлеп ҡалды бит..." "Ә кем һуң ул?" - тип һорай батшабикә. "Белмәйем, - ти батша. - Был яңылыҡты миңә кәңәшсем әйтте". Батшабикә кәңәшсене саҡырта ла, унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорай. "Белмәйем, - ти кәңәшсе. -Миңә был яңылыҡты вәзир әйтте..." Вәзирҙе саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "Белмәйем, миңә был яңылыҡты йөк ташыусы әйтте", тип яуаплай вәзир. Йөк ташыусыны саҡырталар һәм унан "Кем ул Шванти Дирайя?" тип һорайҙар. "О-о, батшабикәм, минең яратҡан ишәгем бар ине, уның исеме Шванти Дирайя. Ул үлеп ҡалды..." тип илаулап яуап бирә йөк ташыусы...**

**Был шундай аҡыл бирә: кеше һарыҡ көтөүе логикаһына бирелмәҫкә тейеш. Ул көтөүҙә юлбашсы һарыҡ соҡорға һикерһә, барыһы ла уның артынан һикерә. Улар "Был соҡорға ниңә беҙ ҙә һикерергә тейеш?" тип уйламай. Юлбашсы һикергәс, был дөрөҫ юл, тип уйлай улар..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы,**
**Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 4344